ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

7-13 август (урағай)

2021

№32 (970)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ғаилә - ул айырым дәүләт,**
ә туған тел - дәүләт теле



2

**Мәғлүмәт ҡорбандары**



3

**Балаларынды...**



туған телдән мәхрүм итмә, атай-әсәй! 12-13

**Ҡомалаҡ**



15

**ТВ-программа** 14

"Киске Өфө" гәзитенең махсус һаны

9

## Туған телем!





*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ КӨСӨ



**Әсә теле тураһында һүҙ сыҡһа, миндә һәр ваҡыт ошондайыраҡ һорауҙар тыуа торғайны: ни өсөн туған телем - башҡорт теле Көньяҡ Уралда барлыҡҡа килгән икән, ә башҡа урында түгел? Әйтәйек, шул уҡ төрки теленә ҡараған ҡырғыҙ теле ни өсөн Урта Азияла Ысыҡ-күл буйында йәшәгән халыҡтың әсә теле булып һанала? Ни өсөн бөтәһе лә киреһенсә түгел: Көньяҡ Уралда - ҡырғыҙ теле, ә Ысыҡ-күл буйында башҡорт теле барлыҡҡа килмәгән? Ике тел дә бит төрки тел ғаиләһенә ҡарай... Һәм мин шундай һығымтаға килдем: башҡорт теле - төрки теленең Көньяҡ Урал тәбиғәте менән меңәр йылдар барышындағы ярашыу һөҙөмтәһе ул. Йәғни, Урал тауҙарында үҫкән үҫемлектәр төмө һәм шауы, унда йәшәгән хайуандар һәм ҡоштар тауышы, ере һәм һауаһы, эҫе һәм ямғырлы йәйе, ҡырыҫ һәм буранлы ҡышы - бөтәһе лә әсә телемдә - башҡорт теленең формалашыуына булышлыҡ иткән. Ул башҡа бер ерҙә лә барлыҡҡа килә алмаясаҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорт теле - Көньяҡ Урал тәбиғәт комплексының бер компоненты. Ә ҡырғыҙ теле - Ысыҡ-күл буйыныҡы... Ысынлап та, тарихҡа күҙ һалһаң, башҡорт теле бит егерменсе быуатҡа тиклем тик йәнле һөйләү телендә генә йәшәне. Ата-бабаларыбыҙ төрки телендә яҙҙылар һәм уҡыныла, ғәрәп һүҙҙәрен өйрәнделәр. Әйтергә кәрәк, иҫке төрки теле шул тиклем татар теленә оҡшаған. Ғөмүмән, математик логика күҙлегенән ҡарағанда, башҡорт теле бөгөнгө көндә булмаҫҡа тейеш ине. Ә ул йәшәй! Ул ғына түгел, үҫә, ныҒына, камиллаша, матурая. Ни өсөн тигәндә, уны Көньяҡ Урал тәбиғәте үҙе һаҡлай, уға йәшәргә көс бирә.**

**Былар менән шуны әйткем килә: ошо гүзәл тәбиғәттә йәшәгән башҡорт әсә телендә һөйләшә икән, ул шул тәбиғәт менән гармонияла, тәбиғәт энергияһы унын аша үтә. Шуның өсөн дә әсә теленең көсө сикһеҙ. Ул кешене ижадҡа илһамландыра, аҡыл көсөн бирә, рухын нығыта, һаулығын һаҡлай. Бына ошолар тураһында һөйләргә уйлайым...**

(Дауамы 6-9-сы биттәрҙә).

*АФАРИН!*

# МИҘАЛЛЫЛАР

**Ошо көндәрҙә Японияның баш ҡалаһы Токиола уҙған Олимпия уйындарында яҡташтарыбыҙ - рапирасылар Аделина Заһиҙуллина һәм Тимур Сафин еңеү яулап, Өфөгә ҡайтты. Аэропортта уларҙы Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов, тренерҙары, яҡындары һәм көйәрмәндәре ҡаршы алды.**

Олимпиадала Рәсәй йыйылма командалары составында сығыш яһаған башҡорт спортсылары француз командаларын еңде. Илдең ҡатын-ҡыҙҙар йыйылма командаһында сығыш яһаусы Аделина Заһиҙуллина, Лариса Коробейникова, Инна Дериглазова, Марта Мартьянова алтын миҙал яуланы. Ә бына Владислав Мыльников, Антон һәм Кирилл Бородачев, Башҡортостан рапирасыһы Тимур Сафиндан торған ир-егеттәр командаһы икенсе урынға лайыҡ булды.

Әйткәндәй, Аделина Заһиҙуллинаға 28 йәш, ул Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры, рапира менән алышыу буйынса ике тапҡыр донъя һәм Европа чемпионы, төрлө чемпионаттарҙа Рәсәй Кубоктары еңеүсеһе. Уның беренсе тренеры Ольга Шагаева булған, 2015 йылда Рәсәй йыйылма командаһына ингәс, Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Егор Попов етәкселегендә шөғөлләнә. Ә бына Тимур Сафин быға тиклем 2016 йылда Рио-де-Жанейрола уҙғарылған Олимпиаданың чемпионы һәм призеры булған, ул да Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры, донъя һәм Европа ярыштары еңеүсеһе. Тимур Сафин Ташкентта тыуған һәм ата-әсәһе менән Өфөгә күсеп килгәс, фехтование менән ҡыҙыҡһынып китә. Тәүҙә 19-сы Махсус балалар-үсмерҙәр олимпия резервы мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе була һәм тренер Фәрит Арыҫланов ҡулы аҫтында шөғөлләнә, әле ул Лира Грушина етәкселегендә оҫталығын арттырыуын дауам итә.



12+

*✓ Хәҙер ҡалаларҙа милли мәктәптәрҙә урындарҙың етмәүе, һөҙөмтәлә милли мәктәптәрҙең милли йөҙөн юғалтыуы күҙәтелә. Был мәсьәлә милли-йәмғиәт ойошмаларының көнүҙәк проблемаларының береһе булырға тейеш.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ТОРҒАНЫ БЕР ЭНЦИКЛОПЕДИЯ!



**Мәғлүмәти сығанаҡҡа, шул иҫәптән гәзит-журналдарға ҡытлыҡ юҡ хәҙер. Хатта кәрәгенән артыҡ, тип әйтергә була. Уйландыра торғаны ла бар, хафаға һалғаны ла, ҡыуаныс өләшкәне лә етерлек. Һәр мәғлүмәти сығанаҡ үҙенсә яҡшы һәм кәрәкле. Ләкин бөтә ошо күп төрлөлөк араһында минең күңелемә хуш килгәне - "Киске Өфө" гәзите.**

"Киске Өфө"нөң минең өсөн иң мөһим булған үҙенсәлеге - ундағы мәғлүмәттең иҫкермәүе. Бына әле ошо баҫманың 10 йыл элек сыҡҡан бер һанын астым да уҡып ултырам. Тиҫтә йыл элек ниндәй әһәмиәткә эйә булған һәр мәҡәлә, бөгөнгө көндә лә үҙ актуаллеген юғалтмаған.

Нәҡ ошо гәзит битендә баҫылған тарихи шәхестәр, ваҡиғалар, ғөмүмән, тарихҡа ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙең беҙҙең халыҡ өсөн ни тиклем мөһим икәнен тәүҙә аңлап етмәгәнмен, күрәһең. Бөгөн килеп уларҙың шул тиклем дә бай йөкмәткеле булыуын күреп, аңыма һеңдереп, ҡат-ҡат уҡып сығам. Тарихта үҙенең тос эҙен ҡалдырған шәхестәребеҙ булғанлығын, уларҙың ил һәм хатта донъя кимәлендәге иҡтисади, сәйәси, хәрби үҙгәрештәрҙең уртаһында ҡайнауын күҙ алдына баҫтырып, оло ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм.

Йәштәрҙе күреп, уларҙың ынтылышын, хыялдарын һәм эштәрен күтәрмәләп тороу - "Киске Өфө"нөң тағы ла бер баһалап бөткөһөҙ, әһәмиәтле үҙенсәлеге. Эйе, бөгөнгө заман йәштәренең йәшәү рәүеше, ҡыҙыҡһыныуҙары беҙҙең ваҡыттағынан ҡырҡа айырыла. "Йәштәр китап уҡымай", тибеҙ ҙә ҡыҫҡырабыҙ, ә, бәҡһән, уларҙың китабы электрон икән. "Йәштәр бер көн менән йәшәйҙәр, киләсәкте уйламайҙар", тип бошонабыҙ, ысынында, улар араһында ҙур уныштарға өлгәшкән, киләсәгенә бөгөндән үк ныҡлы нигеҙ һалып ҡуйғандар бихисап имеш. Тәңкитләү еңел ул, ә бына ваҡытында йәштәрҙе аңғарып, уларҙың эшмәкәрлеген йәмғиәткә таныштыу өсөн күп көс түгергә тура килгәнлеген гәзит хеҙмәткәрҙәре генә яҡшы аңлайҙыр.

Хикәйәләрҙе йотлоғоп, бер тынала уҡып сығам, сөнки еңел-елпе әҫәрҙәр бирмәй гәзит. Уйландыра уларҙың һәр береһе. Төрлө яҙмыштар тураһында уҡып, үҙемдең, яҡындарымдың тормошо тураһында уйланам, халҡым яҙмышы хаҡында борсолоуҙар менән йөрәк тула. Ә гәзиттең башҡорт теленә, мәҙәниәтенә, халҡына ҡарата булған ҡарашы айырым маҡтауға лайыҡ. Артабан да ошо юлдан бер тайпылмай атлаһын ине гәзитебеҙ.

"Киске Өфө" торғаны бер энциклопедия. Унда баҡса эштәре тураһында ла мәғлүмәт бар, мәҙәни саралар хаҡында ла ваҡытында белдереп бара, намаҙ уҡыу ваҡытын да гәзиттән ҡарап ҡына торам, баш ҡалалағы хәлваҡиғалар менән дә танышып барам. Бабайыма тағы ла телевизон программаның булыуы бик оҡшай. Ошондай бай эстәлекле, мәҙәни гәзитебеҙ булыуы менән ғорурланам. Гәзит хеҙмәткәрҙәренә арымай-талмай эшләүҙәрен, ә гәзит уҡыусыларға тағы ла оҙаҡ йылдар "Киске Өфө"бөҙҙә алдырып, ҡыуанышып йәшәүҙәрен теләйем.

**Зәмирә УЙЫЛДАНОВА.**

АТАЙ ҺҮҘЕ

**Туған телде һаҡлау, уны ҡулланыу даирәһен киңәйтеү бөгөн милләтебеҙ алдындағы төп бурыстарҙың береһе булып тора. Шулай уҡ беҙ телдең аралашыу сараһы ғына булмағанлығын, ә тәрбиә нигеҙе лә булып торғанын яҡшы аңлайбыҙ. Әхлаҡ, мәҙәнилек өлкәһендә заманабыҙға хас булған күп етешһеҙлектәр туған телде белмәүҙән киләләр. Әсә телен һанға һуҡмау беҙҙе тамырҙарыбыҙҙан, әҙәбиәтебеҙҙән, йырҙарыбыҙҙан, моңобоҙҙан, туған телдә аралашыуҙан мәхрүм итә. Ә ошо атап үтелгәндәр беҙҙең милли тәрбиә нигеҙе булып тора түгелме?**

# ҒАИЛӘ - УЛ АЙЫРЫМ ДӘҮЛӘТ,

## ә туған тел - дәүләт теле



Был мәҡәләмдә туған телебеҙҙе һаҡлау, уны үҫтереү буйынса фекерҙәрем менән уртаҡлашып, ошо йүнәлештә беҙҙең ғаиләбеҙҙә булған традициялар менән таныштырып үткем килә. Аллаға шөкөр, өс балабыҙ ҙа ҡалала тыуып үҫһә лә, барыһы ла туған телдәрендә аралаша, әсә теле аша тәрбиә ала, үҙ моңдарын тыңлай. Өлкән ҡыҙыбыҙ Айгиҙә БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында белем ала, Айтуған улыбыҙ быйыл мәктәпте тамамланы, ә кесе ҡыҙыбыҙ Заһиҙә алтынсы синыфҡа бара. Балаларҙың өлкәндәре туған телде белеп үҫтергән өсөн хатта беҙгә рәхмәт һүҙҙәре әйтә! Башҡорт телен белеү уларға үҙ тиҫтерҙәре менән аралашыуҙа ҙур мөмкинлектәр аса. Әсә телен белеүҙәре балаларға мәҙәниәтебеҙҙе төптән өйрәнергә, уны тойорға булышлыҡ итә. Ғөмүмән, туған тел аша офоҡтарҙың киңәрәк икәнлеген улар яҡшы аңлай.

Туған телде белеү, уға ихтирам иң тәүҙә ғаиләнән килә. Сөнки ғаилә ул үҙе бер айырым дәүләт. Туған тел был кескәй дәүләттең дәүләт теле булған осраҡта ғына һаҡланып ҡалыуына иманым камил. Башҡорт ғаиләһендә башҡорт теле дәүләт теле булырға тейеш. Атай-әсәй, ҡартатай-өләсәй үҙ-ара туған телендә һөйләшмәй тороп, балаларҙа, ейәнейәнсәрҙәрҙә әсә теленә һөйөү тәрбиәләп булмай. Ғөмүмән, бала әсә ҡарынында уҡ үҙ телен ишетеп, милли моңона сорналып үҫергә тейеш. Бала туған телен ишетеп үҫкәндә генә әсә телендә һөйләшәсәк. Йәғни ғаиләлә тере аралашыу булырға тейеш. Аралашыу һирәк икән, минеңсә, баланың теле лә һүнлап асылыуы ихтимал. Бындай осраҡта, ғәҙәттә, уның теле балалар баҡсаһында һәм урыҫ телендә асыла. Беҙҙең ғаиләгә килгәндә, беҙ туғандар, дуҫтар менән аралашып торорға, балаларҙы бер-береһе менән таныштырып, аралаштырып йөрөргә тырышабыҙ. Йышыраҡ ауылда, башҡорт мөхитендә булырға ынтылабыҙ. Был әйтелгәндәр айырыуса әһәмиәтле, сөнки бөгөн беҙгә тере аралашыу етеңкерәмәй. Социаль селтәрҙәр бындай аралашыуҙы алыштыра алмай. Үҙ телебеҙҙе лә беҙ үҙара аралашыуһыҙ үҫтерә алмайбыҙ.

Йортта булған милли баҫмалар (китап, гәзит-журналдар) туған телде үҫтереүгә булышлыҡ итә. Балалар зауыҡлы һүрәттәр менән биҙәлгән баҫмаларҙы үҙ итә. Улар менән бергә әкиәттәр, әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы бергәләп тикшереү, әҫтәлеген һөйләтеү, һорауҙар биреү беҙҙең ғаиләнең бер йолаһы. Ғөмүмән, һәр башҡорт ғаиләһендә үҙенең милли китапханаһы булырға тейештер, тип уйлайым. Өйҙә башҡорт телендә китаптар булыуы, ата-әсәләрҙең дә уларҙы уҡып тороуы балаларҙа ла уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уята. Быны тыш, беҙ башҡортса кинофильмдар, йыр кассеталары, дискылары йыйҙыҡ, мөмкинлек булғанда уларҙы бергәләп ҡарай инек. Хәҙер был йүнәлештә мөмкинлектәр күп. Шулай уҡ ғаилә менән бергәләп ваҡыт-ваҡыты менән фотоальбомдар ҡарау, матур мәлдәрҙе иҫләүҙәр балалар өсөн ҡыҙыклы.

Туған телде үҫтереүҙе тәбиғәткә һөйөү менән ҡуша алып барыу отошлораҡтыр, тиғән уйҙамын. Ғаилә менән тәбиғәт ҡосағына сығыуҙар, шифалы үләндәр, емеш-еләк йыйыуҙар телебеҙҙе төрлө яҡлап өйрәнеүгә тағы ла ҙур мөмкинлектәр бирә. Балалар төрлө үҫемлектәрҙе үҙ телендә танып-күрергә өйрәнә.

Ата-әсәгә баланы милли мөхиттә тәрбиәләү эшен оноторға ярамай. Был йүнәлештә сабыйҙарҙы башҡорт балалар баҡсаларына, башҡорт мәктәптәренә биреү зарур. Әлбиттә, беҙҙең өсөн иң отошлоһо - әсә кешенең мәктәпкә тиклем тик балалар менән генә булыуы һәм уларҙы милли рухта тәрбиәләүе. Ғаиләлә беҙ ошо принциптар менән эш иттек. Нисек кенә ауыр булмаһын, балаларҙы мәктәпкәсә осорҙа әсә кеше тәрбиәләне. Артабан уларҙы милли мәктәптә уҡыттыҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙер ҡалаларҙа, айырыуса Өфөлә, милли мәктәптәрҙә урындарҙың етмәүе, һөҙөмтәлә милли мәктәптәрҙең милли йөҙөн юғалтыуы күҙәтелә. Был мәсьәлә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының һәм башҡа милли-йәмғиәт ойошмаларының көнүҙәк проблемаларының береһе булырға тейеш. Милли йөҙөн юғалтҡан мәктәптәребеҙҙең халҡыбыҙға файҙаһы юҡ, тиғән фекерҙәмен.

Ғөмүмән, туған телебеҙҙе һаҡлау беҙҙән күп көс талап итә. Һәр ғаиләлә ул төрлө ысулдар аша атҡарыла. Минең уйымса, был юҫыҡта эшләнгән эш беҙгә йәҙләтә яҡшылыҡ булып әйләнеп ҡайтасаҡ. Ә инде август айында уҙасаҡ Республика башҡорт ата-әсәләре форумы туған телебеҙҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән мөһим саралар ҡабул итер тигән ниәттә ҡалам.

**Азамат АҠЪЮЛОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда, 6 августа мәғлүмәттәр буйынса, бер тәүлектә 260 сирле асыҡланған. Республикала бөтәһе 49 804 COVID-19 йоҡтороу осрағы теркәлгән. Уҙған тәүлектә һигеҙ кеше коронавирус инфекцияһы ҡорбаны булған. Пандемия башланғандан алып Башҡортостанда 822 кеше ошо мәкерле сирҙән донъя ҡуйған. Тәүлек эсендә 259 пациент дауахананан һауығып сыҡҡан. Һауыҡҡандарҙың дөйөм һаны - 45 780. Коронавирустан вакцинаның тәүге компонентын 982 862 кеше алған, 753 253 кеше иһә вакцинацияны тулыһынса тамамлаған.

✓РФ Президенты Владимир Путин 6 августа Силәбе өлкәһендә һәм Башҡортостанда булды. Ул Силәбе өлкәһендә янғындан зыян күргән райондарҙа булып, уның эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Шул көндә үк Владимир Владимирович Әбйәлил районында ҡоро төҙөлөш ҡатышмалары етештереүсе яңы "Цемикс" заводын асыуҙа ҡатнашты. Был предприятиены асыу сит илдән аҡ цемент һатып алыуҙы ҡыҫҡартасаҡ һәм төбәктә сәнәғәт үсешен тәьмин итәсәк, тип билдәләнде. Ил Президенты Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән эш осрашыуы үткәрҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Сибай филармонияһының яңыртылған тамаша залы быйыл сентябрҙә асыласаҡ, тип белдерҙе. Янғындан зыян күргән филармонияла ремонт эштәре 2019 йылда башланғайны. " Бинаны тулыһынса яңыртып төҙөнөк, тамаша залы 500 урынға уҙрайттыҡ, бәләкәй зал өсөн урын бүлдек. Иң мөһиме - филармонияның үҙенсәлекле архитектураһын һаҡлап ҡала алдыҡ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Башҡортостанда алкоголдән ағыуланып үлеү осраҡтары кәмегән: әгәр 2018 йылда шул сәбәпле 211 кешенең ғүмере өҙөлһә, 2019-ҙа - 104, ә 2020-лә - 73. Был турала социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте. "Тимәк, беҙҙең алкоголгә ҡаршы кампания һөҙөмтәле. Спиртлы эсемлектәр менән рөхсәтһеҙ сауҙа итеүгә ҡаршы көрәш сараларын көсәйттек - бер йылда 4 мең литр ялған хәмерҙе һатыуҙан алдыҡ. Кисен һәм төндә магазиндарҙа иҫерткес эсемлектәр һатыуҙы тыйҙыҡ. Шуға күрә ялған алкоголгә ҡаршы көрәште дауам итәбеҙ", - тип яҙҙы республика етәксеһе.

*✓ Бөгөн төрлө яҡлап мәғлүмәт һөжүме бара. Үҙенең башы менән уйламаған, хәл-ваҡиғаны дөрөҫ баһалай белмәгән йәштәр өсөн бигерәк тә хәүефле осор. Йәш быуын бөгөн кемдең ҡоралы, хәҙерге заманда ул ҡорал - мәғлүмәт.*



КӨНАУАЗ

# МӘҒЛҮМӘТ ҠОРБАНДАРЫ



**Эштән ҡайтып барам. Алдымда ғына коляска этеп, йәш әсәй атлай. Бер ҡулында - телефон. Иҫе китеп, ниндәйҙер вебинар ҡарай, ә сабый илай, унының күп булһа 3-4 ай барҙыр. Сабый тауышына башҡалар ҙа иғтибар итә, тик әсәнең генә унда эше юҡ.**

- Һылыу, бәләкәй бала тиҙ генә ярһый ҙа китә торған, тымыҙа һал, - тинем түҙмәйенсә.

- Мыжыған һайын алһаң, ҡулға өйрәнә. Хәҙер илап тымһа, алырмын. Белһен үҙенә кәрәкте илап алырға ярамағанлыҡты, - тупаҫ ҡына яуапланы йәш ҡатын.

- Өләсәйең шулай тип әйттеме әллә? Беҙҙекеләр ҙә шулай тигән була торғайны, - тип шаяртмаҡсы булдым.

- Юҡсы, - ти яңы танышым. - Үҙем беләм. Бала тәрбиәләү буйынса күп китап уҡыным. Быныһынан тыш, өйҙә тағы өс йәшлеге ултыра әле. Икеһен күтәреп йөрөтөргә нисә ҡул кәрәк?

Коляскалағы бала, ысынлап та, ярһый башланы. Яңы танышым түҙемле булып сыҡты, тәки балаһына эйелеп бер һүҙ ҙә ҡушманы. Ризалығын да һорамай, ҡулыма сабыйҙы алыуыма ла артыҡ илтифат бирмәне. Унығы ныҡ арыған ине булһа кәрәк, шунда уҡ тымды ла, йоҡлап та китте. Балаһының сит кеше ҡуйынында китеп барғанына ла иҫе китмәне әсәнең. Ҡулындағы телефонына нисек тексәйеп барһа, шулай дауам итте. "Ниндәй китаптар уҡыйһың ул?" тип һорағас, балалар туҡланыуы, физиология үҫеше буйынса бер ҡасан да күҙгә салынмаған, ишетмәгән китап авторҙарын атаны.

- Уларҙы кемдер тәҡдим иткәндер бит инде? - тип төпсөшәм.

- Интернетта рекламалайҙар бит, мин йәшәгән ҡаланың йәш әсәләр төркөмөндә һатыусылар бар, шуларҙан яҙҙырып алам, - ти.

Уның китап уҡыуы яҡшы, әлбиттә, әммә балаһы китап буйынса тәрбиәләүе мөмкин түгел. Һәр балаға айырым мөнәсәбәт, иғтибар, тәрбиә алымы кәрәклеген әсәй, өләсәй булараҡ та әйтә алам. Бер әсә-атанан тыуған балаларҙың холҡо ла бер-береһенә оҡшамай бит. Өҫтәүенә, ул атаған авторҙарҙың барыһы ла тиерлек - башҡа мөхит кешеләре. Уларҙың тәрбиә алымы беҙҙең холоҡҡа тура килмәүе лә бар. Бала тәрбиәләгәндә милләт, милли сифаттар, темперамент кеүек төшөнсәләргә иғтибар итеү кәрәк, минеңсә. Һуңғы осорҙа юҡҡа ғына халыҡ педагогикаһын тергеҙеү тураһында мәсьәлә күтәрмәйҙәр.

Әңгәмәләшә торғас, был ҡатындың бөтә ышанған-инанғаны интернет та реклама булып сыҡты. Әйләнгән һайын "Шулай тип яҙылғайны... Шулай тип уҡығайным... Шулай тип әйтәләр... Шуны рекламалайҙар бит... " тип ҡабатлауынан үҙенең башында бер уй ҙа, аҡыл да, фекер ҙә булмауын аңланым.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, яңы танышым - ҡулланыусы йәмғиәттең бер ағзаһы ине. Хәл-ваҡиғаны дөрөҫ анализлай белмәгән, уйлау һәләте булмаған быуын вәкиле. Кем матур тышлыҡ, ялтырауыҡ күрһәтә - шуның артынан барыусы. Үҙенең фекерен бер ҡасан да әйтмәүсе. Тап ошондай кешеләр теләһә кем артынан эйәрергә әҙер ҙә инде. Ә бөгөн тап шундайҙарҙы аулаған, үҙҙәре мәнфәғәтендә файҙаланырға торғандар бик күп. Ғинуар айында Рәсәйҙең ҙур ҡалаларында үткән рөхсәт ителмәгән митингылар, акциялар шуны асыҡтан-асыҡ күрһәтте. Киң мәғлүмәт саралары-нан билдәле булыуынса, уларҙа ҡатнашҡан йәштәр, үҫмерҙәр журналистарҙың бер һорауына ла аныҡ яуап бирә алманы. Нимә өсөн даулашҡандарын, көрәшкәндәрен, кем артынан сыҡҡандарын да белмәй ине бит улар.

Былтыр республиканың абруйлы юғары уҡыу йорттарының беренең тамамлаған туғаным оҙаҡ ҡына һөнәре буйынса эш таба алманы. Ҡулына яңы диплом алған ҡыҙҙан йә стаж, йә эш тәжрибәһе һорап аптыраттылар, бер ҙур ғына ойошмаға "һатыу буйынса белгес" булып урынлашырға ҡарар итә. Тик олатаһы, ғүмер буйы йәш быуынға тәрбиә, белем биреү өлкәһендә намыҫлы эшләгән педагогия хеҙмәте ветераны, клиенттар йөләп итеп, уларға көсләп, эйе, эйе, мәжбүрләп тауар һатыу менән шөғөлләнәсәк ейәнсәренең ҡарарына ҡаршы төштө.

Эйе, бөгөнгө тормошта беренсе планға маркетинг системаһы сыҡты. Ә нимә ул? Үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, ябайлаштырып, үҙебеҙсә әйтһәк, кешегә кәрәкмәгән әйберҙе көсләп һатыу ул. Был һөнәр эйәләре бөгөн бигерәк тә кәрәк. Ни өсөн тиңегеҙме? Билдәле булыуынса, аҡса эшләү маҡсатында бик күп кәрәкмәгән әйбер етештерелә. Шуларҙы һатыу өсөн булдырылған өлкә ул. Маркетологтар халыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндермәй, ә, киреһенсә, уны булдыра. Был, ысын мәғәнәһендә, шулай. Шуны аңлаған олатай, эш хаҡы ярайһы ҙур ғына булыуға ҡарамаҫтан, был ойошмаға ейәнсәрен ебәрмәне. Ә мәжбүр итеүгә, өгөтләүгә бирешкән быуын үҫтереү тап ошондай эш менән шөғөлләнгәндәргә ҡулай.

Эйе, бөгөн төрлө яҡлап мәғлүмәт һөжүме бара. Үҙенең башы менән уйламаған, хәл-ваҡиғаны дөрөҫ баһалай белмәгән, Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләнеү менән сикләнгән, бөтә белем биреү процесы әҙер яуаптары булған тест һорауҙарына яуап биреүҙән ғибәрәт булған мәктәптәрҙә тамамлаған йәштәр өсөн бигерәк тә хәүефле осор. Йәш быуын бөгөн кемдең ҡоралы, хәҙерге заманда ул ҡорал - мәғлүмәт, көслә, шуның ягында. Әлеге йәш әсә лә интернетта рекламаланған, һатылған китапҡа, вебинар-семинарҙарға мөкиббән китеп, үҙен уратып алған тормоштан ситләшкән быуын вәкиле ине...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПУТИН АҠСАҺЫ

**Башҡортостанда яңы уҡыу йылына 486 меңдән ашыу балаға 10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе алыуға 335 мең ғариза ҡабул ителде. Уларҙың 99,4 проценты дәүләт хеҙмәте порталы аша килгән. Был яңы түләүҙе алыу өсөн ата-әсәләргә ғариза тултырырға кәрәкмәй, улар Пенсия фондындағы мәғлүмәттәргә ярашлы, автоматик рәүештә формалаша. Дәүләт хеҙмәте порталынан тыш, ғариза Пенсия фондының бөтә клиент хеҙмәттәрендә ҡабул ителә. Яңы коронавирус инфекцияһы таралыуын иҫкәртеү маҡсатында граждандар Фондтың сайты аша алдан яҙылып, социаль дистанция сараларын үтәүҙәрен иҫәпкә алып ҡына ҡабул ителә.**

10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе 6 йәштән (1 сентябргә тиклем тулған осраҡта) 18 йәшкә тиклемге (3 июлдән һуң тулһа) балалары булған ғаиләләр алырға хоҡуҡлы. Ата-әсәнән тыш, аҡса уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусыларға, опекундарға һәм попечителдәргә бирелә. Мәктәп программаһына ярашлы уҡыуҙарын дауам итkән инвалидтарға һәм һаулығы буйынса сикләүҙәре булғандарға (18 йәштән 23йәшкәсә) ла аҡса түләнергә тейеш. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда төп дөйөм белем биреү программалары буйынса уҡыған алты йәштән 18 йәшкәсә 650 меңдән ашыу баланың 10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү алырға хоҡуғы бар. Уҡыусы балалары булған ғаиләләргә был аҡсаны Пенсия фонды 16 августан түләй башлаясаҡ.

***Ләйсән КИНЙӘБУЛАТОВА, өс балалы әсә, Күгәрсен районы:*** Бер тапҡыр бирелә торған 10 мең һумды Рәсәй Президенты Владимир Путин ғаиләләргә ваҡытынан алда, йәғни 2 августан түләй башларға ҡушты, тинеләр. Беҙҙең ғаилә өсөн был яҡшы яңылыҡ. Балаларҙы яңы уҡыу йылына әҙерләүҙә алдан башларға бик һәйбәт булды. Уҡып йөрөгән өс балаға ла алаcаҡбыҙ был ярҙамды. Ҡыҙҙарҙы мәктәпкә әҙерләү өсөн был ғына, әлбиттә, етмәй. Ҡыҙ балаға күп кәрәк бит, әммә иш янына ҡуш инде. Хәҙер балалар кейеме ололарҙыҡынан да ҡыйбатыраҡ. Кеше араһында матур итеп кейендереп йөрөткө килә. Юғиһә, аҡса өсөн бала табалар ҙа, ҡарамайҙар, кейендермәйҙәр, ашатмайҙар, тигән нахаҡ һүҙҙәр ҙә йөрөй күп балалы ғаиләләргә ҡарата.

Шөкөр, бар нәмәбеҙ ҙә бар: машинабыҙ ҙа, йортобоҙ ҙа, мал-тыуарыбыҙ ҙа, баҡсабыҙ ҙа. Ите-майы, һөтө-ҡатығы, йәшелсә-емеш - барыһы ла үҙебеҙҙеке. Үҙебеҙҙән артып ҡалғанын һатып, аҙыраҡ аҡса ла эшләйбеҙ йәки үҙебеҙгә кәрәкле әйбергә алмаштырып алабыҙ. Быйыл йәй буйы ҡаланан килгән бер ғаиләгә экологик яҡтан таҙа ауыл эремсеген, май-ҡаймаҡ биреп торғайным, һатҡаныn да һаттым, кҫтәнәс тип тә ебәргәйнем, үҙенең тракторын алып ҡайтып, бесәнде бер-ике көндә сабып, йыйып, йортҡа килтереп ултыртырға ярҙам итте лә ҡуйҙы. Быға тиклем айға һуҙылған бесән эше шулай бер ауырлыҡһыҙ ғына эшләнде, шөкөр. Үҙебеҙгә лә, балаларға ла көс төшмәне. Бына шулай, кешесә йәшәйем, эшләйем тиһәң, төрләсә ҡыландыраһың инде. "Путин аҡсаһы"ның да бер тинен дә елгә осормаҫҡа ине. Кейемнән тыш, мәктәп кәрәк-яраҡтары ла күп кәрәк бит. Ваҡыты еттһә, уларға ла хаҡ арта торған. Шуға күрә аҡса күсеү менән ҡыҙҙарҙы ултыртып, йә Мәләүез, йә Күмертауға сығып китергә уйлайбыҙ.

***Илсинә ЗАҺИҘУЛЛИНА, Көйөргәҙе районы:*** Яңыраҡ ошо мәктәп уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгән Путин аҡсалары тураһында һөйләшеп торҙоҡ әле. Тетмәкәйен тетә генә бит бер танышым бөтәһенең дә. "Ун меңгә хәҙер нимә алаһың, бер баланы мәктәпкә әҙерләүгә утыҙ меңең дә етмәй хәҙер, фәлән дә-фәсмәтән...", - ти. Әлләсе, мин еткерергә тырышам ул. Әле лә ул түләүгә нимә алырға була һәм нимә алырға кәрәк икәнен улым менән һөйләшеп, кәңәшләшеп, яҙып ҡуйҙыҡ. Еткерергә теләһәң, еткерәһең инде. Быға тиклем уныһы ла юҡ ине бит. Эштән профсоюз комитеты балаларыбыҙға өс мең бүлһә лә, утыҙ мең алған һымаҡ ҡыуана инем. Был 10 мең беҙҙең ғаилә өсөн, ысын мәғәнәһендә, ҙур бүләк! Өҫтәүенә, элекке һымаҡ белешмә йыйып, йә бер ойошмаға, йә икенсеһенә йөрөргә лә кәрәкмәй, автоматик рәүештә күсеүе шул тиклем уңайлы. Һуңғы йылдарҙа дәүләт башлығының балалы ғаиләләргә йөҙ менән боролоуының сағыу миҫалы ул.

**Ләйсән СӘЛИХОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Гәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, йыл башынан республикала 129 кеше һыуға батҡан, уларҙың 16-һы - балалар. Ведомствола билдәләүҙәренсә, батып үлеүҙең йыш осраған сәбәптәренең береһе - иҫерек килеш һыу инеү. "Эскән кешенең хәүеф тойғоһо юғала, рефлекстары кәмей. Берәй хәл була ҡалһа, дөрөҫ ҡарар ҡабул итә алмай", - ти Башҡортостандың Авария-ҡотҡарыу хеҙмәте начальнигы Владимир Темашев.

✓Рәсәйҙә паспортта никах һәм балалар тураһында мотлаҡ билдәләр бөтөрөлдө. Премьер-министр Михаил Мишустин Рәсәй гражданының паспортына мәғлүмәттәр индереү ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр тураһында хөкүмәт ҡарарына ҡул ҡуйҙы. Яңы ҡағиҙәләр буйынса, никах теркәү һәм айырылышыу, 14 йәшкә тиклемге балалар, бынан алда бирелгән паспорттар һәм сит ил паспорттары, ИНН, ҡан төркөмө һәм резус-фактор тураһында штамптар документ хужаһының теләге буйынса ғына ҡуйыла. Шул уҡ ваҡытта йәшәгән урын буйынса теркәлеү һәм иҫәптән төшөү, хәрби бурыс тураһында билдәләр мотлаҡ ҡала.

✓19-20 августа Сибайҙа һәм Баймаҡ районында "Урал аръяғы-2021" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы ойошторола. Документта билдәләнеүенсә, яңы коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау өсөн инвестиция һабантуйын уҙғарғанда барлыҡ санитар-эпидемиологик нормаларҙы һәм ҡағиҙәләрҙе үтәү мотлаҡ. Инвестиция һабантуйында федераль һәм төбәк дәүләт учреждениелары, Рәсәй һәм сит ил бизнесы вәкилдәре, инвесторҙар, эксперттар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнаша.

✓Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, урман фондына килтерелгән зыян күләме 3,9 миллион һум тәшкил итә. Был турала Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығынан хәбәр ителәр. Әлеге ваҡытта республиканың урман фонды биләмәһендә урта класлы янғын хәүефе һаҡлана. Уттан 2746,6 гектар майҙан зыян күргән. 15 апрелдән 29 июлгә тиклем Башҡортостанда 236 урман янғыны теркәлгән. Былтыр республикала 116 урман янғыны иҫәпләнгән.

✓ *Ирәкташ ҡаялары (Инзерские зубчатки) биләмәһендә ҡырҡылған ағас хаҡында хәбәрҙәр баҫылып сыҡҡас, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында популяр турист объекты буйынса кәңәшмә үткәрергә ҡарар ителә.*



ҠЫҪҠАСА

# ҠУЛЫҢДА БЕЛЕШМӘ БУЛҺЫН!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе.** Хәҙер медицина ойошмаларында планлы дауаланыу өсөн ковидҡа ҡаршы вакцинация тураһында мәғлүмәт күрһәтергә кәрәк. Музейға, төнгө клубҡа барғанда, шулай уҡ ябыҡ биналарҙа күмәк кеше ҡатнашлығындағы физкультура һәм спорт сараларын уҙғарғанда вакцинация хаҡында белешмә йәки ПЦР-тест талап ителә. Күмәк кеше ҡатнашлығындағы (500-ҙән ашыу) саралар республиканың баш санитар табибы менән килешеп кенә ойошторолорға тейеш. Был "Салауат Юлаев", "Өфө" футбол клубы уйындарына һәм башҡа профессиональ спорт командаларына ҡағыла.

✓ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы субсидия алыу өсөн документтар ҡарау ваҡытын өс көндән 30 көнгә тиклем оҙайтты.** "Әгәр элек ғариза яҙыу ваҡыты декабрҙә өс көн менән сикләнһә, хәҙер субсидия биреү өсөн агросәнәғәт предприятиеларының ғаризалары 30 календарь көн дауамында һайлап алына, ул 1 ноябргә тиклем башлана, был иһә иң яҡшы дәғүәселәрҙе ентекле һайлап алырға мөмкинлек бирә", - тине вице-премьер һәм ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәт ултырышында. Республика бюджеты ла быйыл май бирә торған үҫемлектәр етештереүҙе арттырыуға 23 миллион һум бүлде. Башҡортостан премьер-министры Андрей Назаров Ауыл хужалығы министрлығына республиканың ауыл хужалығы предприятиеларын финанслау өсөн федераль проекттарҙа әүҙемерәк ҡатнашырға ҡушты.

✓ **Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, урман фондына килтерелгән зыян күләме 3,9 миллион һум тәшкил итә. Был турала Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығынан хәбәр иттеләр.** "Урманды һаҡлау" федераль проекты буйынса маҡсатлы күрһәткес 17,3 миллион һумдан артмай, тине республика Урман хужалығы министрлығының урманды һаҡлау һәм яҡлау бүлеге начальнигы Динил Әхмәтов. Әлеге ваҡытта республиканың урман фонды биләмәһендә урта класлы янғын хәүефе һаҡлана. Уттан 2746,6 гектар майҙан зыян күргән. 15 апрелдән 29 июлгә тиклем Башҡортостанда 236 урман янғыны теркәлгән. Былтыр республикала 116 урман янғыны иҫәпләнгән. 28 июлдә Хәйбулла районында өс гектарҙан ашыу майҙанда янғын сыҡҡан. Әлеге ваҡытта утты һүндереү эштәре алып барыла.

✓ **Башҡортостанға өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү өсөн өҫтәмә рәүештә 123 миллион һум бүленә.** Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ошондай бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Был аҡса балаға өс йәш тулғанға тиклем ғаиләләргә айлыҡ түләүгә йүнәлтелә. Түләүҙең суммаһы төбәккә бәйле, балалар өсөн йәшәү минимумына тиң. Рәсәйҙә ул уртаса 11,3 мең һум тәшкил итә. Өҫтәмә аҡса 17 төбәккә йүнәлтелә, был тағы 12,5 мең баланы пособие менән тәьмин итергә мөмкинлек бирергә тейеш. "Быйыл ошондай түләүҙәргә федераль бюджеттан бөтәһе 58 миллиард һум самаһы ҡаралған. Хөкүмәт артабан да ишле ғаиләләргә ярҙам итәсәк", - тине Михаил Мишустин 22 июлдә уҙған Хөкүмәт ултырышында.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АЭРОПОРТ ЯҢЫРА



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә "Өфө" халыҡ-ара аэропортын реконструкциялау планы тураһында яҙҙы.**

Билдәләнеүенсә, алдағы ике йылда өс терминалды берҙәм архитектура концепцияһына ҡушыу һәм вокзал алды үҙәк секторын яңыртыу планлаштырыла. "Көтөү залында пассажирҙарҙың осоу яланын түгел, ә бетон стеналарға ҡарап ултырыу миңә оҡшамай ине. Эске һауа линияларының яңы корпусында хәҙер улай түгел. Терминалдың дөйөм майҙаны 29 мең квадрат метрға тиклем, ә үткәреү һәләте сәғәтенә - 600-ҙән 1200 кешегә тиклем. Бинала телетраптар, багажды эшкәртеү комплекстары, мәғлүмәти системаларҙың барыһы ла бар. Иң мөһиме - уңайлылыҡ һәм пассажирҙарҙың хәүефһеҙлеге", - ти республика етәксеһе. Ул шулай уҡ Өфө аэропорты Рәсәйҙең иң заманса һәм уңайлыларҙың береһе булыуын, ә хеҙмәтләндереү сифатының халыҡ-ара кимәлгә сығыуын билдәләне. "Беҙҙә Рәсәй эсендәге рейстар артты, Евразия иҡтисади союзы илдәренә яңы йүнәлештәр астыҡ. Республика яйлап көрсөккә тиклемге позицияға сыға. Ҡайһы бер яңы йүнәлештәр өҫтәлде хатта. Ошо көндәрҙә "Өфө" халыҡ-ара аэропорты ике миллион пассажир ҡабул итеп, Волга буйы федераль округының һауа гавандәре араһында алға сыҡты", - тине Радий Хәбиров.

# ҮҘМӘШҒҮЛДӘР КҮБӘЙҘЕ



**Башҡортостанда алты айҙа үҙмәшғүлдәр һаны 68 процентҡа артты, йәғни Федераль һалым хеҙмәте мәғлүмәте буйынса республикала һөнәри килемдән һалым түләгәндәр һаны 54 меңдән ашҡан. Улар алты айҙа бюджетты 194 миллион һумға тулыландырған.**

Һөнәри килемдән һалым түләүселәр льготалы шарттарҙа кредит, лизинг төрөндә финанс ярҙам ала ала. "Минең бизнес" үҙәгендә мәғлүмәт-консультация хеҙмәте алырға мөмкин. Льготалы шарттарҙа электрон маркетплейстарҙа продукция, тауар, хеҙмәт урынлаштырыу буйынса сервисты ҡулланырға була. Үҙмәшғүлдәр дәүләт һәм муниципаль милектәге исемлеккә ингән объекттан бина һайлай ҙа ала. Шулай уҡ "Башҡортостан микрокредит компанияһы"-нан 100-ҙән 500 мең һумға тиклем 2-3 йылға кредит алырға мөмкин. Мәҫәлән, микрофинанслау арҡаһында Өфө паркында быйыл йәй балалар спорт инвентарын прокатҡа алыу пункты, ә Ҡырмыҫҡалы районында туристик глэмпинг асылды.

Бынан тыш, республика Хөкүмәте Төбәк гарантия фонды эшмәкәрлеген үҫтереүгә субсидия биреү тәртибенә индергән үҙгәрештәрҙе раҫланы. Хәҙер фондтан дәүләт ярҙамын үҙмәшғүлдәр ҙә ала ала. "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ һәм эшҡыуарлыҡ башланғыстарына ярҙам итеү" милли проекты сиктәрендә "Үҙмәшғүл граждандар эшмәкәрлеген бойомға ашырыу өсөн уңайлы шарттар булдырыу" проекты ғәмәлгә ашырыла. Уның маҡсаты - үҙмәшғүлдәргә эшҡыуар менән бер рәттән дәүләт ярҙамы биреү.

Үҙмәшғүл сифатында өйҙә косметик хеҙмәт күрһәткән, пассажир һәм йөк ташыған, заказға фото һәм видео төшөргән, байрам һәм саралар үткәргән, юридик консультация биргән, бухгалтерия алып барған, электрон майҙансыҡтарҙа ситтән тороп эшләгән, ҡуртымға фатир биргән, үҙе етештергән продукцияны һатҡан, төҙөлөш эштәре алып барған, биналар ремонтлаған кешеләр теркәлә ала. Федераль законда ҡаралған шарттар үтәлһә, һөнәри килемдән һалымды башҡа эшмәкәрлек алып барғанда ла түләргә мөмкин. Тик максималь килем йылына 2,4 миллиондан артырға тейеш түгел. Физик шәхестәр менән эшләгәндә һалым 4 процент, юридик шәхестәр һәм эшҡыуарҙар менән 6 процент тәшкил итә.

# ТУРИСТ ҺУҠМАҠТАРЫ



**Башҡортостанда турист маршруттары буйынса закон ғәмәлгә инде. Был хаҡта документ республиканың хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылып сыҡты.**

Шулай итеп, республикала закон нигеҙҙәрендә турист маршруттарының хоҡуҡи статусы нығытылды, уны файҙаланыу маҡсаттары һәм принциптары билдәләнде. Республика Дәүләт Йыйылышы рәйесе билдәләүенсә, бындай маршруттар тураһында мәғлүмәт Башҡортостан туризм ресурстары реестрына индереләсәк. Уның әйтеүенсә, был хужалыҡ эшмәкәрлеген республиканың тәбиғәт ҡомартҡыларына зыян килтермәслек итеп планлаштырыуҙа ярҙам итәсәк. "Турист маршруты - ҡиммәтле потенциаль ресурс, уны дөрөҫ файҙаланыу туристарға ғына түгел, төбәк бюджетына ла, уның экологияһына ла файҙа килтерәсәк, - ти К.Толкачев. - Федераль закон нигеҙҙәре төбәктәрҙең был йүнәлештәге эшмәкәрлеген көйләү бурыстарына туранан-тура күрһәтмә бирмәй лә, ҡайһы бер субъекттарҙа турист маршруттарын файҙаланыуҙың хоҡуҡи аспекттары яҡшы ғына эшләнгән".

Бынан алда "Башинформ"да хәбәр ителеүенсә, закон проектын эшләүгә Башҡортостандың Инйәр янындағы Ирәкташ ҡаялары (Инзерские зубчатки) биләмәһендә ағас ҡырҡыу тарихы сәбәпсе булды. БР Урман хужалығы министрлығында аңлатма биреүҙәренсә, Ирәкташ ҡаяларына алып барған юлда ағас ҡуртым килешеүе нигеҙендә комбинат ихтыяждары өсөн ҡырҡылған. Социаль селтәрҙәрҙә иң киң мәғлүмәт сараларында Белорет районының Инйәр янындағы Ирәкташ ҡаялары биләмәһендә ҡырҡылған ағас хаҡында хәбәрҙәр баҫылып сыҡҡас, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында популяр турист объекты буйынса кәңәшмә үткәрергә ҡарар ителә. Башҡортостандың туристар яратҡан Ирәкташ ҡаялары (Инзерские зубчатки) махсус хоҡуҡи статус ала. Ирәкташ ҡаялары - Көньяҡ Урал һыртындағы Оло Инйәр менән Тирлән йылғалары араһындағы тау һырты. Уның оҙонлоғо 10 км самаһы, иң бейек урыны - диңгеҙ кимәленән 1161 метр юғарылыҡта. Кварцит һәм кварц ҡатышмаларынан тора. Уның иң күренекле үҙенсәлеге - тау һыртының төньяҡ өлөшөндәге ҡаялар циркы тип аталған урын - Ирәкташ ҡаяларының түңәрәк майҙан рәүешендә төркөмләнеп урынлашҡан ере.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Еңеү паркында "Десантсылар быуыны берлеге" арт-объектын асыу тантанаһы уҙҙы. Тантанала һауа-десант ғәскәрҙәре ветерандары, курсанттар, кадеттар ҡатнашты. Сәләмләү һүҙе менән Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин сығыш яһаны. Һәйкәлде асҡандан һуң йыйылыусылар һәләк булған десантсыларҙы бер минутҡа тын ҡалып иҫкә алды. Артабан 2055 йылда асылырға тейешле мөрәжәғәт менән капсулаһы һалынды. Тантана аҙағында, күк йөҙөндә аҡ төтөн ҡалдырып, "Первушино" аэродромы пилотаж төркөмөнөң өс самолеты осоп үтте.

✓Ошо көндәрҙә Өфөнөң Спорт һарайында "Салауат Юлаев-2021" хоккей клубы кубогы" тамамланды. Йәштәрҙең мизгел алды турнирында төүге тапҡыр хужалар - Өфөнөң "Толпар" командаһы еңеү яуланы. Лев Бердичевский тәрбиәләнеүселәре һуңғы матчты "динамосылар" менән 7:1 иҫәбенә тамамланы. Икенсе урынға - "Омские Ястребы", өсөнсөгә "Динамо" ЙХК сыҡты.

✓Яҡын-тирәләге йорттарҙа йәшәүселәрҙең бихисап мөрәжәғәтенән һуң Спорт һарайы алдындағы ойошторолмаған транспорт туҡталҡаһы ябылды. Баш ҡала халҡы был территория ауыр йөк машиналары менән тулыуы һәм көн дауамында двигатель шауы, газ һәм бензин еҫе аңҡып тороуына зарлана ине. Әле йәйәүлеләр, велосипедсылар, коляскалы атай-әсәйҙәр үтеп йөрөй алһын өсөн майҙанға ҡуйылған ваҡытлыса ҡамауҙар алына. Бында ауыл хужалығы йәрминкәләрен үткәреү дауам итәсәк. Баш ҡала хакимиәте майҙанды төҙөкләндереү буйынса ҡала халҡының фекерен cityadm@ufacity.info электрон почтаһына йыя, һуңынан иң яҡшы тәҡдимдәр тауыш биреүгә сығарыласаҡ.

✓"Һуғыш балалары тураһында" законға ярашлы Өфөлә "Һуғыш балалары" тигән танытма тапшырыу дауам итә. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева әйтеүенсә, Өфөлә 50 меңдән ашыу һуғыш балалары йәшәй һәм күптәренә танытма бирелгән. "Был документҡа ярашлы, уларға ҡайһы бер социаль ярҙам төрҙәре күрһәтеләсәк һәм Башҡортостан Башлығы указы буйынса бер тапҡыр түләү алырға ла хоҡуҡтары бар", - тине ул.

✓Баш ҡаланың Минһажев урамында ремонт эштәре бара. Ошо эштәр менән бәйле, ремонтланған участкала транспорт хәрәкәте туҡтатыласаҡ. Подрядсы ойошмалар урамдағы ремонт эштәрен 30 сентябргә тамамларға ниәтләй.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуған ваҡытта ярҙам итеү өсөн резервистар төркөмдәре ойошторолаһаҡ. Әрме хеҙмәтен үтеүселәр ойошмаларҙа үҙ вазифаларында эшләп йөрөйәсәк, шул уҡ ваҡытта хәрби йыйындарҙа ла ҡатнашаһаҡ.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭШСЕ ҺӨНӘРМӘНДӘР ЯРЫШЫ

**"Йәш профессионалдар (WorldSkills Russia)" IX Милли чемпионат финалын Өфөлә үткәреү тураһында һуңғы ҡарар ҡабул ителде. Сара баш ҡалала 25-29 август көндәрендә ойошторолаһаҡ һәм уға әҙерлек барышы менән Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров таныштырҙы. Рәсәй Мәғариф министры Сергей Кравцов ойоштороу эштәре һөҙөмтәһен юғары баһаланы һәм рәхмәт һүҙҙәрен еткереп, сараны килеп ҡараясағын белдерҙе.**

"Төп ярыш майҙаны - Йәш профессионалдар паркында павильон конструкцияларын төҙөү тамамланған. Кәрәкле ҡоралдар һатып алынған. Чемпионаттан һуң улар урта һөнәри белем биреү учреждениеларына таратылаһаҡ. Шулай итеп, төбәк буйлап бөтә колледждарҙың матди-техник нигеҙенең 70-тән ашыу проценты яңыртылаһаҡ", - тине Андрей Назаров.

Чемпионат финалында ҡатнашыусылар 7 бүлеккә туплан-ған 105 һөнәри компетенция буйынса үҙ оҫталығын күрһәтәсәк: төҙөләш һәм төҙөләш технологиялары; информацион һәм коммуникацион технологиялар; ижад һәм дизайн; етештереү һәм инженер технологиялары; хеҙмәттәр өлкәһе; транспорт һәм логистика; мәғариф. Республиканың 498 кешенән - 280 конкурсант һәм 2018 эксперттан торған командаһы 103 компетенция буйынса ярыштарҙа ҡатнаша. Ә барлығы Рәсәйҙең 75 төбәгенән 3 меңгә яҡын кеше килеүе көтөлә. Шуға күрә федераль власть вәкилдәре ҡатнашлығындағы ҙур саралар тәжрибәһен, пандемия торошон һәм вакциналау тиҙлеген иҫәпкә алып, эпидемиологик хәүефһеҙлек регламенты төҙөлгән. "Теркәлеү үткәндә һәм майҙанға инеү урынында температура фильтры ҡуйылаһаҡ. Тән температураһы юғары һәм ОРВИ билдәләре булған кешеләр теркәлмәйәсәк һәм майҙанға ла үткәрелмәйәсәк. Улар өсөн урында уҡ ПРЦ-тест биреү мөмкинлеге булдырыла. Коронавирус йоҡтороуы асыҡланған кешеләр обсерваторға 14 көнлөк карантинға ябыла, шулай уҡ ауырыуҙарға ваҡытында ярҙам күрһәтеү өсөн Зубово инфекцион дауаханаһында урындар булдырыла. Чемпионатты килеп күрергә теләгән халыҡтың да вакцина эшләтеү тураһында белешмәһе булыуы контролдә тотолаһаҡ", - ти был турала БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров.

Әйткәндәй, Милли чемпионат уҙғандан һуң Башҡортостанда бер нисә йүнәлеш буйынса бизнес мираҫ та ҡалаһаҡ. Мәҫәлән, Башҡортостанда пилотһыҙ авиация кластеры булдырыла: "Геоскан", "Гироплан", "Ховер" компаниялары пилотһыҙ вертолеттар, квадрокоптерҙар, аэротакси етештерәсәк. Ә чемпионаттан һуң ҡалған тент конструкциялары физкультура-дауалау комплекстары ойоштороу өсөн муниципалитеттарға тапшырылаһаҡ.

# ТАҒЫ ҠУНАҠ КӨТӘБЕҘ

**Башҡортостандың баш ҡалаһы 11 августан 23-өнә тиклем Рәсәйҙә тәүгә уҙғарылған юниорҙар араһында спорт көрәше буйынса Донъя беренселеген ҡабул итергә әҙерләнә.**

Ярыштарҙа 50-нән ашыу илдән 1,5 мең спортсы ҡатнашырға теләк белдергән. Донъя кимәлендәге сара "Өфө-Арена" спорт һарайында ойошторола. Чемпионатта барлыҡ санитар ҡағиҙәләр һәм талаптар үтәлә, тип билдәләнеләр республика Хөкүмәтендә. Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов әйтеүенсә, ҡатнашыусылар, ҡунаҡтар һәм башҡа илдәрҙең кең мәғлүмәт саралары вәкилдәре Рәсәйгә килер алдынан 72 сәғәт эсендә эшләнгән ПЦР-тестың һөҙөмтәһен күрһәтергә тейеш. Йәштәр араһында көрәш чемпионаты спорт көрәшенең олимпия һәм олимпияға ҡарамаған төрҙәре буйынса үткәрелә: 11-14 августа - грэпплинг, 15-23 августа - грек-рим көрәше һәм иркен көрәш.

Йәштәр чемпионатында Алжир, Әрмәнстан, Австралия, Австрия, Әзербайжан, Беларусь, Бразилия, Болгария, Канада, Ҡытай, Хорватия, Чехия, Эквадор, Мысыр, Испания, Эстония, Финляндия, Франция, Грузия, Германия, Греция, Гватемала, Венгрия, Һиндостан, Иран, Израиль, Италия, Ҡазағстан, Ҡырғыҙстан, Латвия, Литва, Молдавия, Монголия, Нидерланд, Норвегия, Польша, Португалия, Румыния, Көньяҡ Африка Республикаһы, Рәсәй, Сербия, Шри-Ланка, Швейцария, Словения, Швеция, Тажикстан, Тунис, Төркиә, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Украина, АҠШ һәм Үзбәкстан спортсылары ҡатнаша.

# ХЕҘМӘТ ТӘ ИТ!

**Башҡортостанда профессиональ армия булдырыуға бер аҙым яһарға йыйыналар, йәғни запастағы һалдаттар һәм офицерҙарға тыныс хеҙмәттә эшләп йөрөү менән бер рәттән, хәрби хеҙмәткәр булып ҡалыу мөмкинлеген - хәрби частар менән контракттар төҙөп, мобилизация резервына инергә тәҡдим итәләр. "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында Башҡортостан Республикаһының хәрби комиссары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Рәмил Хәйретдинов ошо хаҡта белдерҙе.**

Хәрби бурыстарҙы хәл итеү йәки ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуған ваҡытта ярҙам итеү өсөн резервистар төркөмдәре ойошторолаһаҡ. Аныҡлап әйткәндә, әрме хеҙмәтен үтеүселәр йәки юғары уҡыу йорттарының хәрби кафедраһын тамамлаусылар ойошмаларҙа үҙ вазифаларында эшләп йөрөйәсәк, шул уҡ ваҡытта, резервта булыу контрактына ярашлы, алдан раҫланған график буйынса хәрби йыйындарҙа ла ҡатнашаһаҡ. Шуның менән ул элек йәше тура килгән барлыҡ граждандарҙы ла сборҙарға йәлеп итеүҙән айырыла ла инде. Йәғни әле һүҙ хәрбиҙәрҙе профессиональ кимәлдә әҙерләү тураһында бара.

Резервта булыу хәрби вазифаға тәғәйенләүҙе, хәрби дәрәжә биреүҙе, аттестациялауҙы, квалификацияны имтихан тапшырыуҙы, шулай уҡ хәрби йыйындарҙы әҙерләү һәм ойоштороу барышында мобилизация, хәрби әҙерлек сараларында ҡатнашыуҙы ҡуҙғалай. Башҡортостанда резервистар Әлкә -2 хәрби часы ҡарамағында булаһаҡ.

Резервистарға аҡса ла түләнәсәк. Хәрби йыйындар булмаған осорҙа, үҙҙәренен граждан хеҙмәтендә эшләгән ваҡытта офицерҙар өсөн пособие 4-5 мең, һалдат һәм сержанттар өсөн 2-3,5 мең һум тәшкил итәсәк. Өс көнлөк йыйындар ваҡытында пособие күләме 10 мең һум (офицерҙар өсөн) һәм 5 мең һум (һалдаттарға) булаһаҡ. Йылына бер тапҡыр үткән бер айлыҡ сборҙарҙа уның күләме офицерҙар өсөн 50-75 мең һум, һалдат һәм сержанттарға 25 мең һумға тиклем булаһаҡ. Шул уҡ ваҡытта төп эш урынындағы эш хаҡы ла һаҡлана. Шулай уҡ резервистарға форма бирелә, улар өс тапҡыр туҡланыу менән тәьмин ителә.

Элек хәрби хеҙмәт үткән, сәләмәтлеге буйынса сикләүҙәр булмаған һәм йәше тура килгән теләгән кеше контракт төҙөй ала. Һалдат һәм сержанттар өсөн йәш сикләүе - 42 йәшкә тиклем, кесе лейтенант, лейтенант, өлкән лейтенант, капитан, капитан-лейтенанттарға - 52 йәшкә тиклем, майор, 1-се ранг капитандарына - 57 йәшкә тиклем. Кандидаттар һайлау ике этапта үтә. Тәүгеһендә уны урындағы военкомат ойоштора, кандидаттар медицина һәм психологик тикшереү, хөкөм ителеү-ителмәүгә тикшереү үтә, икенсе этапта кандидаттың һөнәре буйынса хәрби часть үткәрә. Резервта булыу тураһында беренсе контракт өс йылға төҙөлә. Артабан ул тағы ла өс - биш йылға, йәки кәмерәк ваҡытҡа - резервта булыуҙың сикләнгән ваҡытына еткәнгә тиклем - оҙайтылыуы мөмкин. Рәмил Хәйруллин белдереүенсә, республиканың хәрби комиссариаттары хәрби хеҙмәттә булып ҡайтҡан егеттәрҙең контракт хеҙмәтенә ҡыҙыҡһыныуы ҙур булырына өмөтләнә.

ҠЫҪҠАСА

# "ЕҢЕҮ ПОЕЗЫ" КИЛДЕ

**31 июлдән 2 августа тиклем баш ҡалабыҙҙа "Еңеү поезы. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фән" тип исемләнгән үҙенсәлекле күсмә күргәҙмә эшләне.** Поезд составындағы экспозиция менән республика халҡы Өфөнөң тимер юлы вокзалында таныша алды. "Еңеү поезы" - хәрәкәтләнеүсе составта урынлаштырылған донъялағы тәүге инсталляция. Уның нигеҙендә - хәрби эшелонды фронтҡа алып барған Елена Чухнюктың прототибы булған машинист Лидия исеменән һөйләнгән Бөйөк Ватан һуғышы тураһында тарих. Экспозиция 2020 йылда Хәтер һәм Дан йылында барлыҡҡа килде. Классик һәм заманса алымдар ярҙамында авторҙар тамашасыны дәһшәтле яу юлдары буйынса алып барған, ысын мәғәнәһендә, "ваҡыт машинаһы"н булдырған. Быйылғы Рәсәйҙәге Фән һәм технологиялар йылы унайынан авторҙар күргәҙмәне Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән совет ғалимдарының фәнни асыштары һәм ҡаҙаныштары менән тулыландырған. Экспозицияла 50-нән ашыу видеопроектор, 18 видеостена, 140-тан ашыу мультимедия экспонаты ҡулланылған.

✓ **"Орлан" поезы Өфө - Ырымбур маршрутын һынап ҡараны, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһынан.** РА-3 рельсы автобусы 409 сакрым араны алты сәғәттән аҙыраҡ ваҡыт эсендә үтте. Маршрут Дим, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүеҙ, Күмертау станциялары аша үтеп китә. Маршрут биләмәһендә 2,3 миллион кеше йәшәй. Маршруттың өстән ике өлөшө (262 сакрымы) Башҡортостандан үтә. Тиҙ йөрөшлө "Өфө - Күмертау" поезы 2 апрелдә рейсҡа сыҡты. Аҙаҡҡы станцияға тиклем юл хаҡы - 600 һум самаһы. Тимер юлсылар уны Ырымбурға хәтлем оҙайтырға тәҡдим итте. Һынау йомғаҡтары буйынса яңы төбәк-ара маршрут ойоштороу мөмкинлеге тураһында мәсьәлә Башҡортостан һәм Ырымбур властары ҡарамағына сығарыла. Ә автомобилдә Өфөнән Ырымбурға етер сәғәт барырға кәрәк, яҡынса 30 литр яғыулыҡ талап ителә.

✓ **Республиканың прививка яһау пункттарына "Спутник Лайт" яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакцинаның беренсе партияһы килде.** Һәр вакцинация пунктына, беркетелгән халыҡ һанына ҡарап, 80-500 доза бүленде. Һаулыҡ һаҡлау министрлығында билдәләүҙәренсә, "Спутник Лайт" башлыса ревакцинация өсөн һәм табип тәғәйенләүе буйынса ғына файҙаланыла. Ул сир үткәргәндәргә (ярты йылдан һуң ғына), шулай уҡ медицина күрһәтмәһе буйынса тап ошо вакцина тәҡдим ителгән граждандарҙың айырым категорияларына тәғәйенләнгән. "Спутник Лайт" - Н.Ф.Гамалея исемендәге Эпидемиология һәм микробиология милли тикшеренеү үҙәгендә етештерелгән бер компонентлы вакцина. Ул, "Спутник V" вакцинаһы кеүек үк, 26-сы серотиптағы кеше аденовирусы нигеҙендә етештерелгән.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тәмәке тартыуҙы ташлағанда

❖ Ҡарағат япрағы, бөтнөк һәм мәтрүшкәне тигеҙ өлөштә алып ҡушырға. Йыйылманың 2 ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Тәмәке тартҡы килгән саҡта ошо төнәтмә менән ауыҙҙы сайҡарға. Бер үк ваҡытта уны ашарҙан 30 минут алда көнөнә 3 тапҡыр ярты-шар стакан эсергә.

## Веналарҙың киңәйеүе

❖ Веналарҙың варикозлы киңәйеүенән аяҡтар һыҙлаһа, ҡаты төйөрҙәр барлыҡҡа килһә, ҙур бакты тултырғансы кесерткән һалырға һәм ҡайнар һыу ҡойорға. Йылы төнәтмәгә аяҡтарҙы тығып, йылы әйбер менән яҡшылап урап ябырға һәм һыу бөтөнләй һыуынғанса шулай ултырырға. Аҙнаһына бер тапҡыр ошолай дауалануҙа аяҡтарҙың һыҙлауын баҫырға, ҡаты төйөрҙәрҙән арынырға ярҙам итә.

## Ашҡаҙан ауырыуҙары

❖ Ҡара көртмәлә ашҡаҙанды яҡшырта. Халыҡ дауаһы унан төрлө төнәтмәләр әҙерләп эсергә кәңәш итә. Мәҫәлән, 2 ҡалаҡ ваҡланған ҡара көртмәле емешенә 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойоп, төнгәлөккә ҡалдырырға (8 сәғәткә). Төнәтмәне ашарҙан 15-20 минут алда сирек стакалап эсергә, дүртенсе тапҡыр йоҡлар алдынан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡара көртмәле емешенә ҡайнар һыу ҡойоп ике сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне дүрткә бүлеп, көн дауамында эсеп бөтөргә.

## Пневмония

❖ 2 ҡалаҡ һары мәтрүшкә сәскәһе һәм япраҡтарын ҡәнүә тартҡыс ярҙамында онтарға. Шунан 100 грамм зәйтүн майы һәм 30 грамм баҙам майы ҡушырға. Әҙерләмәне 10 минут быу өҫтөндә тотоп йылытҡас, һөҙөргә. Пневмония менән ауырығанда көнөнә 8 тапҡыр берәр балғалаҡ эсергә, аҙағынан бал ҡабып ҡуйырға ла ярай. Дауаны ҡасан ашауға ҡарамай ҡулланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Хәҙер инде башымда, әсә теле ижади фекерләү менән тығыҙ бәйләнештә һәм үҙ телендә уҡыған балаларҙа ижадилыҡ сифаттары көслөрәк һаҡлана, тигән фекер барлыҡҡа килде.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Шыршыны борон ҡатмарлы һуғыш яндарын (шыршы һәм ҡайын пластиналарҙы йәбештереп) һәм саңғылар эшләү өсөн ҡулланғандар.

Япраҡлы төрҙәрҙән имән ныҡлыҡ һәм дымлылыҡҡа бирешмәү кәрәк булғанда тотонолған. Буранның аҫҡы өлөшөн, иҙән таҡтаһын имәндән һалғандар. Имәндең үҙағасын мискә яһаусылар һәм ағас оҫталары юғары баһалаған. Унан мебель, һандыҡ, ауыл хужалығы инвентары, сана табаны, тәгәрмәс, киле һәм төйгөстәр эшләгәндәр. Художестволы кәсептәр үҫешә башлағас, имәндән нәфис ҡул таяҡтары яһай башлағандар. Олондағы ороларын соҡоп, туҫтаҡтар эшләгәндәр.

Д.Н. Соколов яҙғанса, йүкәне "башҡорттар борондан... башҡа ағастарға ҡарағанда кәрәкяраҡтары өсөн күберәк ҡырҡҡандар". Унан төрлө ҙурлыҡтағы соҡоп яһалған тәпәндәр, он өсөн улаҡтар эшләнгән. Борон ҙур йүкә ағастары олонон соҡоп ҡайыҡ яһағандар. Йүкә таҡталарҙан өҫтәл, шкаф, һауыт-һаба кәштәһе, бәләкәй һандыҡтар эшләнгән. Ҡырыу станогында соҡоп яһалған һауыттар етештереү йүкә ағасы нигеҙендә үҫешкән. Йыһаздар һәм башҡа кәрәк-яраҡ өсөн шулай уҡ йүкә ҡабығы, һалабаш, ҡурыҙ, сүс ҡулланылған. Йүкәнән ат япмаһы, ҡап, септә һуҡҡандар, муҡса, кәшүл, ҙур шешәләр өсөн тышлыҡ, сабата үргәндәр.

Ҡайынды башҡорт оҫталары ваҡ-төйәк әйберҙәр эшләү өсөн ҡулайлы тип иҫәпләгән. Унан нескә сүместәр, туҫтаҡтар, ҡалаҡтар, ағас сылбырҙар, эйәр һәм ыңғырсаҡтар, өҙәңгеләр, ҡамыт, дуға, көйәнтә, иләүестәр эшләнгән. Хужалыҡта ҡайын ҡайыры - туҙҙан яһалған әйберҙәр ҙә бик күп ҡулланылған.

Башҡорттар тирәктә лә лайыҡлы баһалаған. Ул иң ҙур япраҡлы ағас булған, ваҡыт үтеү менән оҙонлоҡҡа 30-40 метрға, киңлеккә метр яҙымға тиклем үҫкән. Уның олононан йоҡа ҡырлы ҡайыҡтар юнғандар. Урта ҙурлыҡтағы ағастарҙан ялғаштар һәм иген, он улаҡтары әҙерләгәндәр. Өйәңке һәм уҫаҡ ағастары ла шундайыраҡ маҡсаттарҙа ҡулланылыш тапҡан. Әммә уларҙың үҙағасы сифаты йәһәтенән насарыраҡ булған, шуға эшкә һирәк тотонғандар.

Йыла һәм ҡарама - ҡаты ағас төрҙәре, улар йорт һалғанда, аш-һыу кәрәк-ярағы, ҡайһы бер транспорт саралары һәм ҡулайламалары эшләгәндә ҡулланылған. Ҡараманы бөгөп эшләнгән әйбер өсөн тотонғандар. Башҡорттар бигерәк тә тәгәрмәс туғыны, өҙәңге, сана табаны һәм башҡа деталдәрен, дуға, көйәнтәне йыш яһаған. Ҙур булмаған, бөтөн көйө һырып эшләнгән, семәрле һауыттар осраған: тәрилкәләр, вазалар, тоҙ һауыттары. Урал алды территорияһында киле өсөн һәм башҡа төр төйгөстәр ҙә ҡараманан булған. Йыла ағасын көпһөҙ саңғылар, тәгәрмәс туғындары эшләүгә тотонғандар.

Саған сағыштырмаса һирәк ағас һаналған. Уның үҙағасының ныҡлығы билдәле булған. Сағандан сөй, шына, тирмән тәгәрмәсе тештәрен һәм шестерналарын, иләү ҡабалары, урынағастарға ҡылыстар (бердо) эшләгәндәр. Фольклорҙа сағандан эшләнгән музыкаль инструмент - ҡумыҙ тураһында телгә алына. 1968 йылда Салауат районы Миндәш ауылында шундай һығылмалы ҡумыҙҙа беҙгә үйнап та күрһәткәйнеләр. Саған үҫкән төбәктәрҙә унан ҡалаҡтар, ә ороһо һәм тамыр тирәһенән сүместәр һәм ҙур булмаған туҫтаҡтар оҫталағандар. Ҡаты булыуға ҡарамаҫтан, сағандың олоно яҡшы бөгөлгән. Шуға унан сана табаны, саңғы, көйәнтәләр ҙә эшләнгән.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

(Башы 1-се биттә).

## Әсә теле һәм ижади фекерләү

Әсә теле үҙ телеңдә һөйләшеү, аралашыу өсөн генә кәрәк, тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Имеш, ул башҡа бер нәмәгә лә кәрәкмәй. Шуғалыр инде, күп кенә ата-әсәләр балаларын рус телендә уҡытырға тырыша. Әлбиттә, улар хаталана, бәлки, белеп тә етмәйҙәрҙер. Баланың формалашыуында әсә теленең роле баһалап бөткөһөҙ бит ул. Мин был мәҡәләмдә шуларҙың береһенә туҡталып китмәк булам. Йәғни балала ижади фекерләүҙең формалашыуында әсә теленең ролен күрһәтергә уйлайым. Бәлки, кемгәләр файҙаһы тейер. Дөрөҫ, миңә лә был хәҡиҡәтте аңлау өсөн ниндәйҙер ваҡиғаларҙа ҡатнашырға һәм тикшеренеүҙәр аша үтергә тура килде. Шуға һүҙемде шул ваҡиғаларҙан башлап китәйем әле.

...Райондың булыр инем. Тағы бер ваҡиғаға барып юлыҡмаһам...

...Ҡыҙыбыҙҙы беренсе синыфҡа әҙерләй башлаған ваҡыт ине. Ҡатыным, улыбыҙҙы башҡорт синыфына бирҙек, әйҙә, быныһын рус синыфында уҡытайыҡ, тип мине өгөтләй башланы. Мин уның идеяһына ҡаршы килдем. Баяғы ваҡиғаны иҫкә төшөрҙөм дә, әсә телендә һөйләшеп йөрөгән бала икенсе телдә уҡыһа, уның фекере үҫмәйәсәк, тип аңлатҡан булдым. Ҡатыным был һүҙҙәргә ышанмағас, белмәйем, ҡайҙан башыма килгәндер, мин уға фекеремде иҫбатлау өсөн эксперимент үткәреп ҡарарға тәҡдим иттем. Маҡсатты ошолайыраҡ ҡуйҙым: башҡорт синыфында уҡыған балалар менән рус синыфында уҡыған башҡорт балаларының фекерләү кимәлдәрен сағыштырыу. Ул ҡыҙыҡһынып ризалашты. Беҙ экспериментты һигеҙенсе синыфтарҙа үткәреп ҡарарға булдыҡ. География дәресе өсөн (ҡатыным география уҡытыусыһы) темәй йөрөнө. Бәхәһ, рус синыфында уҡыған башҡорттарҙың яртыһы тиерлек, хатта ҡайһы бер "отличниктары" ла эште атҡара алмаған. Ә башҡорт синыфында бөтәһе лә, шул иҫәптә насар уҡый тигәндәре лә, ниндәйҙер кимәлдә эште үтәй алған. Ҡайһы берҙәре проблеманы хәл итеүҙең шундай оригиналь юлдарын күрһәткән, аптырап китерһең! Ошо эксперименттан һуң ҡатыным башҡа бер нәмә лә өндәшмәй генә ҡыҙыбыҙҙы башҡорт синыфына алып барып бирҙе...

Бына ошо ваҡиғаларҙан һуң, баяғы әсә теле менән фекерләү араһында ниндәйҙер бәйләнеш булырға тейеш, тигән идея ҡабаттан тоҡанды. Үҙемдең һораүҙарыма яуап табам, тип, психология һәм педагогика тураһындағы фәнни хеҙмәттәрҙе ҡыҙыҡһынып өйрәнә башланым. Бер ваҡыт ижади психология тураһындағы китапҡа килеп юлыҡтым. Шул китапта ижади фекерләүҙе тикшереү өсөн әҙерләнгән тестар минең иғтибарымды йәлеп итте. Бәхәһ, беҙ ҡатыным менән балаларҙың логик фекерләүен түгел, ә ижади фекерләүен тикшергән булып сыҡҡанбыҙ!

**Хәҙер инде башымда, әсә теле ижади фекерләү менән тығыҙ бәйләнештә һәм үҙ телендә уҡыған балаларҙа ижадилыҡ сифаттары көслөрәк һаҡлана, тигән фекер барлыҡҡа килде.** Бының дөрөҫлөгөн тикшереү өсөн миндә шундай идея тыуҙы: районыбыҙҙан сыҡҡан бөтә башҡорт милләтенән булған ғалимдарҙың һәм ижад кешеләренең ниндәй телдә уҡығанын тикшереп ҡарарға уйланым. Әлбиттә, быны эшләүе ҡыйын булманы, сөнки районыбыҙҙың тарихы һәм уның күренекле шәхестәре тураһында хеҙмәттәр етәрлек. Һәм шундай ҡыҙыҡлы күренешкә тап булдым: ижад өлкәһендә генә түгел, ә сәнәғәт, медицина өлкәләрендә эшләгән бөтә күренекле ғалимдар ҙа башҡорт мәктәптәрендә уҡыған булып сыҡты. Ә бына рус синыфын тамамлап, ижади йәки күренекле шәхес булып

# БАШҠОРТ



...Районыбыҙҙа Аҡмулланың юбилейына арналған сәсәндәр бәйгеһе үткәрелгәйне. Бәйгенең аҙаҡҡы этабы - әйтештәр. Уҡыусылар быңдай бәйгелә тәүге тапҡыр ҡатнаша, шуға, улар өйрәнеп китһен өсөн әйтеш ике кеше араһында булманы, ә бәйгесе комиссия алдындағы өҫтәлдән үҙе телләгән "билет"ты ала һәм унда яҙылған ниндәйҙер фекерҙе йәки мәҡәлде йә шиғри, йә проза телмәре менән дауам итергә тейеш. Әлбиттә, бында ниндәйҙер фекерләү талап ителә.

Мин ике уҡыусымды алып барғайным. Береһе - башҡорт, икенсеһе рус синыфында уҡыған башҡорт балаһы. Аҙаҡҡыһы "отличник", үҙе бик әүҙем, телгә шәп, бигерәк тә рус телендә теле телгә йоҡмай. Әйтештәр килеп еткәйне, шуныһы бәйгелә ҡатнашырға ҡырҡа баш тартты. "Мин улайтып фекерләй белмәйем, беҙҙе өйрәтмәнеләр", - тип аңлатты.

***Мин бәйгегә ике уҡыусымды алып барғайным. Береһе - башҡорт, икенсеһе рус синыфында уҡыған башҡорт балаһы. Аҙаҡҡыһы "отличник", үҙе бик әүҙем, телгә шәп, бигерәк тә рус телендә теле телгә йоҡмай. Әйтештәр килеп еткәйне, шуныһы бәйгелә ҡатнашырға ҡырҡа баш тартты. "Мин улайтып фекерләй белмәйем, беҙҙе өйрәтмәнеләр", - тип аңлатты. Ярышҡа көсләп тиерлек сығарғайным, ысынлап та, ул бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Ә башҡорт синыфында уҡығаны үҙенә эләккән фразаны рәхәтләнеп дауам итте. Ул да ундай эште тәүгә башҡара, бер кем дә алдан өйрәтмәгәйне. Хатта районда икенсе урын алды…***

Ярышҡа көсләп тиерлек сығарғайным, ысынлап та, ул бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Ә башҡорт синыфында уҡығаны үҙенә эләккән фразаны рәхәтләнеп дауам итте. Ул да ундай эште тәүгә башҡара, бер кем дә алдан өйрәтмәгәйне. Хатта районда икенсе урын алды...

Бына ошо ваҡиғанан һуң миндә, әсә теле менән фекерләү араһында ниндәйҙер бәйләнеш булырға тейеш, тигән уй тыуҙы. Тыуҙы ла, туҡтап ҡалды, сөнки артабан ни эшләргә белмәнем. Шуға артыҡ төпкә төшөп китмәнем, хатта оноткан дастар әҙерләнек. Уҡыусылар үткәндәргә оҡшатып эшләмәһендәр өсөн, тестарға ошоға тиклем бер ваҡытта ла эшләп ҡаралмаған проблемалы эштәр индерелде. Әйтергә кәрәк, рус синыфындағы башҡорт балалары өсөн тестар башҡорт һәм рус телендә лә әҙерләнде, йәғни улар үҙҙәре теләгән телде һайлай ала ине.

Экспериментты ҡатыным үҙе генә үткәрҙе, бөтәһен дә үҙ күҙе менән күрһен һәм үҙ ҡулы менән эшләтһен, тип мин дәрескә инмәнем. Ул мәктәптән шул тиклем аптырап ҡайтты, хатта бер ни тиклем өндәш-

***✓ Кемдәрҙең аҡыл күҙе яҡшы күрә, улар өсөн әсә теле - иң ҡәҙерле рухи байлыҡ... Ә кемдәрҙең маңлай күҙенән башҡа бер нимәһе лә юҡ - уларға әсә теле ғәйбәт һөйләү өсөн генә кәрәк...***



# ТЕЛЕНЕҢ КӨСӨ

китә алған башҡортто таба алманым. Әллә эҙләнеүем шулай ғына булдымы икән? Ошо урында мине дөрөҫ аңлағыҙ: районыбыҙҙан сыҡҡан күренекле башҡорттар тураһында һүҙ йөрөтәм. Әлбиттә, рус синыфын тамамлап, юғары белемгә эйә булғандары ла етәрлек. Тик мин, уҡытыусы кеше буларак, беренсе сиратта, тәүгеләре мәктәп тәрбиәһенең маҡсаты булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Сөнки милләтебеҙҙең баһаһын улар күтәрә бит...

Артабан инде минең ҡулыма идеямдың дөрөҫлөгөн иҫбатлаған, йәғни тел менән фекерҙең тығыҙ бәйләнештә булыуын өйрәнгән фәнни хеҙмәттәр килеп эләкте. Бигерәк тә был өлкәлә рус психологы Л.С.Выготский ("Телмәр һәм фекер") менән Швейцария психологы Жан Пиаже ("Баланың телмәре һәм фекерләүе") бик ентекле тикшереү үткәргән. Улар икеһе лә донъя кимәлендә билдәле ғалимдар. Бөгөнгө көндә лә Европала, Америкала эшләгән педагогтар уларҙың теориялары менән ҡоралланған. Әлбиттә, уларҙың хеҙмәттәрендә фекерләү һәләтенә бәйле башҡа асыштар ҙа эшләнгән. Ә бына тел менән фекерләү араһындағы бәйләнеш тураһында нимә яҙғандар һуң? Бына шулар тураһында ябай ғына итеп яҙып үтәйем әле.

...Баланың 2-3 йәштәрҙә һөйләшә башлауын һәр ата-әсә белә. Баҡһаң, телмәре менән бергә фекерләүе лә формалаша башлай икән. Бала башта һөйләмдәр төҙөргә өйрәнә, һәм шул телдең структураһы нигеҙендә фекерләүе барлыҡҡа килә. Әйтәйек, бала башҡорт телендә һөйләшә башлай икән, фекерләүе шул телдең бөтә үҙенсәлектәрен ҡабул итә. Артабан тел - фекерҙе, фекер телде үҫтерә башлай. Фекерләү һәләте балала 13-14 йәштәрҙә формалашып бөтә. Бына ҡыҫҡаса ғына ошолар. Тик шуны әйтергә кәрәк: Л.С.Выготский ҙа, Ж.Пиаже ла үҙҙәренең хеҙмәттәрендә "тел" һәм "фекерләү" тигән төшөнсәләр менән эш итә. Ә әсә теле менән ижади фекерләүгә айырым туҡталмағандар. Минең аңлауымса, улар, беренсе сиратта, уҡыусыларға телмәр менән фекерләүҙең дөйөм закондарын еткерергә тырышҡан. Был бик яҡшы, сөнки шул дөйөм закондар беҙгә әсә теле менән ижади фекерләүҙең ниндәй бәйләнештә булыуын аңларға ярҙам итә лә инде. Ә хәҙер шуларҙың бәйләнеше тураһында. Шулай итеп, мәҡәләмдең кульминацияһына килеп еттем...

...Ижади фекерләүҙе икенсе төрлө тәбиғи фекерләү тип тә атайҙар. Сөнки психология өлкәһендә эшләгән бөтә ғалимдар ҙа бер тауыштан тиерлек, һәр бала был донъяға ижади булып тыуа, тип иҫбатлай. Балаларҙың уйнағанын күҙәткән кешеләрҙең береһе лә был фекергә ҡаршы килә алмайҙыр, тип уйлайым. Шуға баланың ижадилығы - уның тәбиғи торошо ул.

Шулай уҡ филология өлкәһендә эшләгән ғалимдар әсә телен дә тәбиғи тел тип атай. Сөнки әсә теле балаға ата-әсәнең аралашыуынан ғына күсмәй, ә генетик кимәлдә лә тапшырыла. Көнсығыш аҡыл эйәләре, кешенең ҡанындағы хәтер мейеләге хәтерҙән мең тапҡырға күберәк, ти. Йәғни, әсә теле баланың тәбиғәтенә ул тыумаҫ борон уҡ һалынған була.

Шулай булғас, үрҙә иҫкә төшөрөп үткән ғалимдар, **тел фекерләү һәләтен барлыҡҡа килтерә,** тип иҫбатлағандар икән, беҙ уларҙың теорияһын дауам итеп, **тәбиғи тел тәбиғи фекерләүҙе барлыҡҡа килтерә,** тип әйтә алабыҙ. **Йәғни, әсә теле ижади фекерләүҙе тыуҙыра.** Башҡаса булыуы мөмкин түгелдер. Шуға баланың ижадилығын һаҡлау өсөн уның тәбиғилеген һаҡларға кәрәк. Бының өсөн, беренсе сиратта, бала әсә телен өйрәнергә тейеш. Үрҙә фекерләү һәләте 14 йәштәргә формалашып бөтә, тип әйтеп үткәйнем. Бына шул осорға тиклем йәш үҫентеләргә ҡояш йылыһы нисек кәрәк булһа, ижади фекерҙең үҫеүенә лә әсә теле шул тиклем кәрәк. Йәғни, бала әсә телен ни тиклем яҡшыраҡ өйрәнә, фекерләүе лә шул тиклем тәрәнәйә һәм киңәйә. Ә ижади фекерләүе, үҙ сиратында, башҡа тәбиғи һәләттәренең асылып китеүенә ярҙам итәсәк...

Әсә теле менән ижади фекерләүҙең бәйләнеше тураһында бына ошолар. Һүҙҙәремде йомғаҡлайым. Әсә теле һөйләшеү, аралашыу өсөн генә кәрәк, тип уйлаусылар ҡырҡа яңылыша. Дөрөҫ, аралашыу өсөн дә кәрәк, тик ул телдең күренгән өлөшө генә. Ә бына күренмәгән өлөшө шул тиклем тәрән һәм киң. Ул күренмәгән өлөшөн маңлай күҙе менән түгел, ә аҡыл күҙе менән генә күреп булалыр ул. Шуға кемдәрҙең аҡыл күҙе яҡшы күрә, улар өсөн әсә теле - иң ҡәҙерле рухи байлыҡ... Ә кемдәрҙең маңлай күҙенән башҡа бер нимәһе лә юҡ - уларға әсә теле ғәйбәт һөйләү өсөн генә кәрәк...

### Әсә теле һәм аҡыл

Әсә теле менән аҡыл - айырылғыһыҙ күренеш, һәр кешегә әсә теле аша ғына аҡыл керергә мөмкин. Әйтергә кәрәк, был хәҡиҡәтте боронғо замандарҙа уҡ яҡшы белгәндәр, хатта ҡайһы берәүҙәр ул белемдәрен яуыз маҡсатта ла ҡулланырға маташып ҡараған. Донъя тарихында бынды дәлилләүсе ваҡиғалар етәрлек. Хәҙер шуларҙың береһен һөйләп үтһәм, әсә теле ниндәй аҡыл көсөнә эйә булыуын күрһәтә алырмын, тип уйлайым.

...Ун алтынсы быуаттарҙың баштарында Европала немецтар Чехияны тыныс юл менән оккупациялайҙар. Йәғни бер ниндәй ҡан ҡойошһоҙ, хәйләле юлдар менән ундағы бөтә власты үҙ ҡулдарына төшөрә башлайҙар. Күпмелер ваҡыттан һуң Чехияның власть структураларында бер чех та ҡалмай, хатта Прағаның ҡала советында тик немецтар ғына тороп ҡала. Бындай тормош оккупанттарға шул тиклем оҡшай, шуға улар Чехияны мәңгегә үҙ ҡулдарына тоторға уйлайҙар. Ә бының өсөн чех халҡына милләт буларак үҫергә ирек бирмәҫкә, уларҙы аҡылһыҙ итеп, "икенсе сорт" кимәлендә тоторға кәрәк. Сөнки тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп татыған немецтар шуны яҡшы аңлаған: әгәр чехтарға аҡыл яғынан үҫергә ирек бирелһә, уларҙы властан ғына түгел, ҡылған эштәре өсөн илдән дә ҡыуып сығарасаҡтар - аҡыллы милләттең үҙ иленә хужа булырға теләүе тәбиғи күренеш ул.

Ә нисек итеп уларҙы "икенсе сортлы" итергә? Немецтар уның юлын уйлап табалар. Ғөмүмән, немецтар - Европалағы иң көслө фекерләүсе милләттәр. Бигерәк тә улар кеше психологияһын яҡшы белгәндәр. Дөрөҫ, ун алтынсы быуатта психология тигән фән булмаған әле, ул ваҡытта философияның бер тармағы ғына булып иҫәпләнгән. Уның ҡарауы, иң көслө философтар немецтар араһынан сыҡҡан: И. Кант, Гегель, А. Шопенгауэр, Ф.Ницше... Әгәр егерменсе быуатҡа тиклем Европала йәшәгән күренекле ун философты атарға ҡушһалар, иманым камил, шуның бишәүһе немец милләтенән булыр ине.

Бына шул кеше психологияһын яҡшы белгән немецтар ун алтынсы быуаттың башында уҡ чехтарҙы түбән аҡыллы милләт итеп ҡалдырыу юлын таба алғандар. Уның юлы ябай ғына: чехтарға әсә телендә белем алыу тыйылған - уларҙы көсләп немец телендә уҡыта башлағандар. Шулай уҡ милли йолалар үткәрттерелмәгән. Ябай күренһә лә, былар бик һөҙөмтәле юл ул. Шуға бындай милләтте юҡҡа сығарыу алымының һөҙөмтәләре оҙаҡ көттөрмәгән. Ысынлап та, чех халҡының аҡылы күҙгә күренеп төшкән, хатта уларҙың күбеһе бысраҡ эшкә генә ярай башлаған. Ә иң ҡурҡынысы: күренекле шәхестәр, ижад кешеләре ҡырҡа кәмегән.

Немецтарҙың был яуыз ниәтен беренселәрҙән булып Прага университеты профессоры Ян Гус аңлап ала. Ул әсә телен, милли йолаларҙы һаҡлау өсөн көрәш башлай: халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып бара, бик күп ялҡынлы сығыштар яһай, фәнни китаптар яҙа. Бигерәк тә "Чех теле грамматикаһы" исемле хеҙмәте алдынғы ҡарашлы милләттәштәре тарафынан яратып ҡабул ителә. Тырышлығы бушҡа китмәй - халыҡ көрәшкә күтәрелә. Был ваҡиға тарихҡа "Гуситтар хәрәкәте" исеме менән инеп ҡалған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, көрәш баҫтырыла, ә Ян Гус ихтилалға тиклем уҡ яҙалап үлтерелә...

Ләкин уның башлаған эшен дауам итеүсе кеше табыла. Уның исеме - Ян Амос Коменский. Ул донъялағы иң күренекле педагог ҡына түгел, ә ысын мәғәнәһендә әсә теленең көсөн, уның белем биреүҙәге әһәмиәтен аңлаған бөйөк шәхестәрҙең береһе. Шуға педагогикаһының күп өлөшөн әсә телен һаҡлау һәм үҫтереүгә бағышлай. Мәҫәлән, мәктәп директоры булып эшләй башлаған ваҡытта уҡ, хеҙмәт юлын шул вазифанан башлап ебәрә, беренселәрҙән булып балаларҙы әсә телендә уҡытыуҙы ойоштора. Бик күп фәнни хеҙмәттәр яҙа, әйтәйек, "Чех теленең хазина һандығы", "Телдәргә асыҡ ишектәр" һ.б. Ә бына "Бөйөк дидактика" исемле иң күренекле әҫәрен үҙенең әсә теле - чех телендә ижад итә. Был ул ваҡытта батырлыҡ булып һаналған, сөнки ул осорҙа фәнни хеҙмәттәр йә немец, йә латин телдәрендә генә яҙылырға тейеш булған...

Бына уның әсә теленә ҡағылышлы ҡайһы бер теориялары. Ян Коменский тәрбиә һәм белем биреүҙе дүрт осорға бүлгән. 6 йәшкә тиклемге беренсе осорҙо "Әсә мәктәбе" тип атаған, бында ғаилә тәрбиәһе тураһында һүҙ барғаны аңлашылалыр. Ә бына 6 йәштән 12 йәшкә тиклемге икенсеһенә "Әсә теле мәктәбе" тип исем биргән. Был осорҙа бала мәктәптәге бөтә предметтарҙы мотлаҡ туған телдә уҡырға тейеш. Ни өсөн икәнен ғалим былай тип аңлата: үҫеш закондары буйынса 12 йәштәр тирәһендә баланың фекерләү һәләте формалашып бөтөргә, нығынырға тейеш; бына ошо формалашыу процесына ыңғай шарт тыуҙырыу өсөн әсә телендә уҡырға кәрәк; әгәр ошо осорҙа икенсе телдә уҡыһа, ул процесс туҡтала. Был теорияларҙың дөрөҫлөгөн дүрт йөҙ йылдан һуң, егерменсе быуат башында, Швейцария психологы Жан Пиаже эксперименталь юл менән иҫбат итте. Тик ул фекерләү операциялары 12 йәштә түгел, ә 13-14 йәштәрҙә формалашып бөтөүен күрһәтте (Мин был турала "Әсә теле һәм ижади фекерләү" бүлегендә һөйләнем).

Әгәр әсә телендә уҡымаған кешенең фекерләү һәләте үҫмәй ҡала икән, үҙ телендә уҡымаған бөтөн бер милләт менән нимә булыр? Дөрөҫ, фекерләмәгән милләт аҡылһыҙға әйләнеп, юҡҡа сығасаҡ. Был хәҡиҡәтте немецтар шул ваҡытта уҡ белгәндәр. Ләкин улар чехтарҙы юҡҡа сығара алмағандар, сөнки әсә телен һәм аҡылын һаҡлаған, шулай уҡ Ян Гус, Ян Коменский (һ.б.) кеүек шәхестәре булған милләтте бөтөрөп булмай. Икенсенән, милләттәрҙе ниндәйҙер бер кеше уйлап сығармаған, ә уларҙы тәбиғәт барлыҡҡа килтергән. Әгәр ниндәйҙер милләтте бөтөрөү өсөн көрәш башлайҙар икән, тәбиғәткә, тәбиғәт закондарына ҡаршы сығалар. Дин күҙлегенән ҡарағанда, Аллаһы Тәғәлә менән көрәш башлайҙар. Бына шуға йәшәү өсөн көрәшкән (аҡылы булғандар ғына көрәшә) милләтте еңеп булмай, сөнки Аллаһы Тәғәлә улар менән. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бына был хәҡиҡәтте ҡайһы бер сәйәсмәндәр бөгөнгө көнгә тиклем аңлай алмай...

...Коменскийҙың теориялары менән беренселәрҙән булып Европала Англия ҡоралланды, уларҙан Төньяҡ Америкаға күсте. Чех телендә яҙылған "Бөйөк дидактика" бөтә донъяның телдәренә тиерлек тәржемә ителде. Беҙҙең илдә лә уны бик яҡшы беләләр. Тик беҙҙә уның хеҙмәттәрен бер яҡлы ғына итеп күрһәтергә тырышалар: имеш, ул синыфтарҙы барлыҡҡа килтергән, дәрес системаһын булдырған, һ.б. Ә әсә теле өсөн бөтә ғүмерен бағышлағанын артыҡ һөйләп тә, яҙып та бармайҙар. Әйе, быларҙы педагогика өлкәһендә эшләмәгән кешеләр белмәҫкә мөмкин, тик бына Я. Коменскийҙы өйрәнгән юғары белемле уҡытыусыларҙың күбеһенең, әсә теле үҙ милләтендә онотмау өсөн генә кәрәк, тип һөйләп йөрөүе, нисек кенә булмаһын, ҡыҙғаныс күренеш. Педагогтар педагогикаға ҡаршы булып сыға инде...

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

***Кеше психологияһын яҡшы белгән немецтар ун алтынсы быуаттың башында уҡ чехтарҙы түбән аҡыллы милләт итеп ҡалдырыу юлын таба алғандар. Уның юлы ябай ғына: чехтарға әсә телендә белем алыу тыйылған - уларҙы көсләп немец телендә уҡыта башлағандар. Шулай уҡ милли йолалар үткәрттерелмәгән. Ябай күренһә лә, былар бик һөҙөмтәле юл ул. Шуға бындай милләтте юҡҡа сығарыу алымының һөҙөмтәләре оҙаҡ көттөрмәгән. Ысынлап та, чех халҡының аҡылы күҙгә күренеп төшкән, хатта уларҙың күбеһе бысраҡ эшкә генә ярай башлаған. Ә иң ҡурҡынысы: күренекле шәхестәр, ижад кешеләре ҡырҡа кәмегән.***

***✓ Ғөмүмән, бала ысын мәғәнәһендә тәрбиәле һәм белемле булһын өсөн ул әсә телендә уҡытылған синыфта уҡырға тейеш. Сөнки унда милләттең милли мөхите урынлаша, йәғни "уңдырышлы тупраҡ" барлыҡҡа килә.***

# БАШҠОРТ

**(Башы 1-се, 6-7-се биттәрҙә).**

Әлбиттә, Коменскийҙың күп кенә теориялары бөгөнгө көнгә ярамайҙыр, ә бына әсә теле тураһындағы фекерҙәре мәңгелек, һәр осор өсөн дә актуаль булып ҡаласаҡ. Ғөмүмән, әсә теле менән аҡыл айырылғыһыҙ, тигән хәҡиҡәткә бөгөнгө көнгә тиклем берәүҙең дә ҡаршы килә алғаны юҡ әле, киреһенсә, уның дөрөҫлөгө асыла һәм иҫбатлана ғына бара. Мәҫәлән, Японияла, етмешенсе йылдарҙа булһа кәрәк, ҡайһы бер тел ғалимдары инглиз графикаһына күсергә тәҡдим яһаны. Уларҙа бит хәрефтәр түгел, иероглифтар ҡулланыла. Һәр береһе бер нисә мәғәнә аңлатҡанға, улар бик күп; яңлышмаһам, 600-ҙән ашып китә. Шуға ҡайһы бер ауырлыҡтар килеп тыуа, мәҫәлән, балалар әлифбаны өс йыл өйрәнәләр һ.б. Баяғы идеяны әйткән ғалимдар ошондайыраҡ проблемаларҙы хәл итмәк булалар, йәнәһе. Ләкин Японияның айыҡ фекер йөрөткән кешеләре быға ҡаршы киләләр. Улар, әгәр инглиз графикаһына күсһәк, беҙҙең милләт аҡыл яғынан башҡаларҙан бик күп ваҡытҡа артта ҡаласаҡ, тип иҫбатлайҙар. Баҡһаң, әсә теленең һөйләү телмәре генә түгел, яҙыу телмәрен үҙгәртеү ҙә фекерләүгә һәм аҡылға тәьҫир итә икән.

...Ғөмүмән, японлар әсә телен генә түгел, ә бөтә милли йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлайҙар. Ни өсөн тигәндә, уларҙың бөтәһе лә милләттең үҫешенә булышлыҡ итә. Әйтәйек, милләтте бер үҫемлек тип күҙ алдына килтерһәң, уның теле, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре шул үҫемлек өсөн генә кәрәк булған уңдырышлы тупраҡты барлыҡҡа килтереүсе минералдар ул. Баҡсасыларҙың ниндәйҙер үҫемлек үҫә алмай ултырһа, тупраҡта шул үҫемлеккә кәрәк булған нимәлер етешмәй икән, тип һөйләгәнен ишеткәнем бар. Милләттең "тупрағында" ла нимәлер юҡҡа сыҡһа, ул үҫеүҙән туҡтаясаҡ.

## Әсә теле һәм тәрбиә

Белем биреү системаһында оптималләштереү тип аталған реформалар башҡорт синыфтарының кәмеүенә килтереүе һәр кемгә билдәлелер. Был бигерәк тә башҡорт-рус мәктәптәрендә нык һиҙелде. Сөнки ундай мәктәптәрҙә, ғәҙәттә, бер параллелдә булған рус синыфтарын ҡалдырып, башҡорт синыфтарын ябырға тырыштылар. Бына шуларҙың береһендә уҡытыусы булып эшләгән бер коллегам ошо күренеште әллә ысынлап та хуплап, әллә шул процесҡа ҡаршы тора алмауын йәшереп:

- Хәҙер башҡорт синыфтарының бөтөүе артыҡ ҡурҡыныс түгел, сөнки әсә теле рус синыфтарында ла уҡытыла бит, - тине.

Уның, юғары белемле кешенең, башҡорт синыфтары тик әсә телен өйрәтеү өсөн генә кәрәк, тип уйлауы мине аптыратты. Әйтергә кәрәк, бөгөнгө көндә бик күптәр шулай уйлай ҙа. Дөрөҫ, милли синыфтар әсә телен уҡытыу өсөн бик уңайлы, ләкин уларҙың башҡа мөһим маҡсаттары ла бар...

- Һеҙ йәшелсә баҡсаһы үҫтерәһегеҙме? - тип көтөлмәгән һорау бирҙем мин уға. Ул "эйе" тине лә, аптырап, миңә ҡараны.

- Йәшелсәләрҙең һәр төрөн дә бер түтәлгә ултыртаһығыҙмы?

- Юҡсы, һәр береһенә айырым түтәл кәрәк. Быны һәр кем белә лә инде...

- Ә ни өсөн айырым ултыртыр кәрәк? - тип һорауымды дауам иттем.

- Ни өсөн тип, һәр үҫемлек үҙенә генә хас тәрбиәләүҙе талап итә бит, шунһыҙ яҡшы уңыш алып булмаясаҡ. Әйтәйек, береһенә тыуҙырылған ыңғай шарт икенсеһенә бөтөнләй оҡшамаҫҡа мөмкин. Шулай уҡ ҡайһы берҙәре тиҙерәк үҫә, шуға уларҙың күләгәһендә башҡалары үҫә алмаясаҡ. Бына шуға һәр береһенә айырым түтәл кәрәк, - тип бикентекләп аңлатты ул миңә.

- Дөрөҫ һөйләйһең, коллега, дөрөҫ, - тинем йылмайып. - Ә хәҙер әйт инде: башҡорт балаһы башҡорт синыфында тик әсә телен өйрәнеү өсөн генә белем аламы?

Коллегам бер нөктәгә текләп, әҙерәк уйланып торҙо ла, ҡапыл башын аҫҡа эйеп, миңә ҡарамайынса ғына шәпшәп атлап китеп барҙы. Әллә уйламайынса һөйләгән һүҙҙәренән оялды, әллә минең менән башҡа һөйләшкеһе килмәне - аңлай алмай ҡалдым...

Күреүебеҙсә, бөгөнгө көндә ябай кешеләр генә түгел, күп кенә юғары белемлеләр ҙә балаларын үҫемлек кимәленә лә ҡуймайҙар: баҡсаларындағы йәшелсәләрҙең һәр төрөнә айырым тәрбиә кәрәк икәнен яҡшы беләләр, ә балаларына ла шундай уҡ тәрбиә кәрәклеге тураһында баштарына ла килтермәйҙәр. **Тәрбиә биреүҙе, яҡшы менән насарҙы айырырға өйрәтеү, тип кенә уйлайҙар шикелле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар менән генә сикләнмәй шул. Тәрбиә биреү - ул баланың һәләттәрен асырға ярҙам итеү, уларҙың үҫешенә ыңғай шарттар тыуҙырыу һәм тормошта ҡулланырға өйрәтеү - ғөмүмән, беҙ балаларҙы кешелек йәмғиәтендә йәшәргә әҙерләргә тейешбеҙ.**

...Тәрбиә биреү барышы ла шул баяғы баҡса үҫтергән һымаҡ ул. Мәҫәлән, баҡсаны төрлө милләт балалары уҡыған мәктәп тип күҙ алдына килтерһәк, ундағы түтәлдәрҙе милли синыфтар тип күҙ алдына килтерергә була. Йәғни, балаларға тәрбиә биргәндә, нисек кенә булмаһын, беренсе сиратта, уларҙың ниндәй милләттән булыуы иҫәпкә алына. Ни өсөн тигәндә, һәр милләттең үҙенә генә хас йолаһы, донъяға ҡарашы, психологияһы, бигерәк тә теле, фекерләүе, уйлауы айырылып тора. Был турала уҡытыусылар ғына түгел, педагогиканан алыҫ торған кешеләр ҙә яҡшы беләләр, тип уйлайым.

Милли синыфтарҙа эшләгән уҡытыусылар бына шул милли психологияны иҫәпкә алалар ҙа инде. Кемеһелер быны аңлы рәүештә башҡара, ҡайһы берәүҙәре ирекһеҙҙән. Ни өсөн тигәндә, сифатлы белем бирергә уйлаһаң, синыфта өҫтөнлөк иткән психологияны иҫәпкә алмайынса булмай. Шунһыҙ, дәресең килеп сыҡмаясаҡ. Мәҫәлән, рус синыфтарында белем биргәндә уҡытыусылар уҡытыу алымдарын, беренсе сиратта, рус психологияһының үҙенсәлектәренә нигеҙләйҙәр; башҡорт синыфында - башҡорттоҡона. Бына шул ваҡытта ғына һәр баланың индивидуаль сифаттары үҫешә башлай. Сөнки уҡытыусы, мәҫәлән, башҡорт синыфында эшләй икән, уларҙың тел үҙенсәнлеген, фекерләү структураһын, уйлау тиҙлеген, характерын, уларҙың йолаларын, тормошҡа ҡараштарын күҙ уңында тотоп, шуларға ярашлы күнегеүҙәр, практик эштәр эшләтә һәм тәрбиә эше алып бара. Быңдай методика, әлбиттә, башҡорт балаһының үҫешенә, тәбиғәт тарафынан бирелгән һәләттәренең асылыуына ыңғай шарттар тыуҙырасаҡ. Ғөмүмән, методиканы төҙөгәндә, милли психологияны иҫәпкә алыу - шул милләт балаларының үҫешенә уңдырышлы тупраҡты булдырыу ул.

Әгәр инде башҡорт балаһын рус синыфына уҡырға бирәләр икән, уның тәбиғи үҫеше туҡтала. Сөнки рус психологияһы үҙенсәлектәренә нигеҙләнгән методика башҡортҡа хас булған сифаттарҙы үҫтерә алмай. Һәм баланың тәбиғи үҫеше тотҡарлана. Артабан инде, үҙе булып ҡала алмағас, унда башҡаларға оҡшау сифаты (подражание) көсәйә: уның аҡылы синыфташтарынан, уҡытыусыларҙан (һ.б.) отоп алған һәләттәр - шаблондар менән тула. Йәғни улар һымаҡ һөйләшә, уйлай, эшләй, хатта атлай, кейенә һ.б. Ғөмүмән, уның индивидуаллеге тулыһынса тиерлек юҡҡа сыға. Бигерәк тә йәнле (ижади) фекерләүе фекерләү шаблондары менән алмашыныуы бала өсөн ҡурҡыныс. Шуға уҡытыусылар рус синыфында уҡыған башҡорт балаһынан ижади шәхес тәрбиәләргә тырыша икән - бик ауыр буласаҡ: баланың ижадилыҡ сифаттарының үҫеше шул синыфта уҡый башлау менән туҡтап ҡала. Артабан инде был тәбиғи һәләттәре үҫмәй ҡалған балалар үҙҙәренә оҡшаған һөнәр таба алмай йонсой...

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шул милли синыфтар бөгөнгө көндә кәмей... Әлбиттә, был күренеште тик оптималләштереүгә генә япһарыу дөрөҫ булмаҫ. Ошоға тиклем башҡорт синыфтарын астырыу өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылғайны бит. Бөгөнгө көндә лә береһе лә тыймай: етәрлек кимәлдә балалар йыйһаң, рәхим ит, башҡорт синыфы аса алаһың. Бөтәһе лә дөрөҫ һымаҡ. Тик ата-әсәләр балаларын рус синыфына биреүҙе хуп күрәләр шул. Имеш, рус синыфында балалар яҡшыраҡ уҡый, берҙәм дәүләт имтихандары рус телендә, "ҙур кеше" буласаҡтар, һ.б. Уларға быны өсөн тулы хоҡуҡ та бирелгән: Рәсәй закондары буйынса балаларын үҙҙәре теләгән телдә уҡыта алалар. Шуныһы ҡыҙыҡ: беҙҙең илдә бөтөп барған үҫемлектәрҙе һәм хайуандарҙы һаҡлау өсөн төрлө закондар сығарыла, дәүләт кимәлендә хәл ителә. Ә Рәсәйҙәге милләттәрҙе һаҡлау, башлыса, ата-әсәләрҙең ҡулына тапшырылған. Ысынлап та, улар шундай хоҡуҡҡа эйә була алалармы? Бөтә ата-әсәләр ҙә педагогиканы юғары кимәлдә беләләрме икән ни? Миңә ҡалһа, ата-әсәләргә балаларын үҙҙәре теләгән телдә уҡытыу хоҡуғы биреү - балаларҙы шәхси милек кимәленә төшөрөү ул...

Ә бит күп кенә алдынғы илдәрҙә әсә телендә белем алыу мәжбүри - дәүләт кимәлендә күҙәтеүгә алынған. Яңыраҡ үҙәк телеканалдарҙың береһендә ҡыҙыҡлы тапшырыу булғайны: Францияла йәшәгән бер әсә балаһы менән Рәсәйгә ҡайтырға рөхсәт һорай. Ләкин Франция етәкселеге быны өсөн бер шарттың үтәлеүен талап итә: бала Рәсәйҙә француз телендә уҡырға тейеш. Күреүебеҙсә, ҡайһы бер илдәр хатта башҡа илгә күсеп киткән граждандарының әсә телендә белем алыуын талап итә, бер ҙә ата-әсәләренән һорап тормайҙар.

Ул илдәрҙә дөрөҫ эшләйҙәр, минеңсә. Сөнки фәлсәфәүи, шулай уҡ дини күҙлектән дә ҡарағанда ла, ата-әсәләр балаларына бер нисек тә хужа була алмай, хатта уларҙы тыуҙырһалар ҙа. Сөнки балалар - тәбиғәттеке. Ә ата-әсәләр, беренсе сиратта, шул тәбиғәттең бала табыу сараһы ғына. Тик уларға тәбиғәт тарафынан шундай бурыс йөкмәтелгән: балаларын үҫтереп, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫтырырға тейештәр. Ата-әсәләр балаларына мөхәббәттән башҡа һәләт тә, аҡыл да бирә алмайҙар, сөнки балалар үҙ һәләттәре һәм аҡылдары менән был донъяға киләләр - үҙ ризыҡтары менән тыуалар. Әлбиттә, ул "ризыҡтар" иҫәбенә баланың милли сифаттары ла инә.

Милли сифаттар йәки милли психология бер бөгөн генә барлыҡҡа килмәгән, быуаттар, меңәр йылдар буйы үҙен уратып алған бөтә ауырлыҡтарға ҡаршы көрәшә-көрәшә формалашып, ҡандан-ҡанға күсеп, бөгөнгө көнгә етеп, йәшәүгә хоҡуҡ алған күренеш бит ул. Уның формалашыуына кешелек йәмғиәте генә түгел, ә үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһы, тауҙар һәм тигеҙлектәр, йылғалар - ғөмүмән, бөтә Тәбиғәт булышлыҡ иткән. **Шуға милли психологияны һәр халыҡтың был тормошта йәшәү өсөн кәрәк булған иммунитеты, тип атайым. Йәғни башҡа милләт булып ҡыланмай, үҙең булып ҡалып, индивидуаль һәләттәреңде артабан үҫтереп, йәмғиәтебеҙҙәге башҡа милләт вәкилдәре менән бер тиң булып һәр кем йәшәй ала.**

Йыш ҡына, балаларыбыҙҙың киләсәге Аллаһы Тәғәләнең ҡулында, тип әйтергә яраталар. Дөрөҫ, Уның ҡулында. Тик балалар киләсәктә Аллаһтың ҡулында булһын өсөн уларҙы Ул нисек тыуҙырған, шулай тәрбиәләргә кәрәк. Шул ваҡытта ғына балалар киләсәктә Уның ҡулында булыр. Әгәр инде ата-әсәләр балаларын үҙҙәренсә үҙгәртергә теләйҙәр икән - уларҙың киләсәге өсөн Ул яуап бирмәй. Ә ата-әсәләр үҙҙәре...

Ғөмүмән, бала ысын мәғәнәһендә тәрбиәле һәм белемле булһын өсөн ул әсә телендә уҡытылған синыфта уҡырға тейеш. Сөнки әсә телендә уҡытылған синыфтарҙа шул милләттең милли мөхите урынлаша, йәғни "уңдырышлы тупраҡ" барлыҡҡа килә. Шундай синыфтарҙа уҡығанда ғына балаларҙың тәбиғи һәләттәре асылыр, аҡылдары камил булыр, ижадилыҡ сифаттары һаҡланыр, әхлаҡи яҡтан да нык булы-

***Әгәр инде башҡорт балаһын рус синыфына уҡырға бирәләр икән, уның тәбиғи үҫеше туҡтала. Сөнки рус психологияһы үҙенсәлектәренә нигеҙләнгән методика башҡортҡа хас булған сифаттарҙы үҫтерә алмай. Һәм баланың тәбиғи үҫеше тотҡарлана. Артабан инде, үҙе булып ҡала алмағас, унда башҡаларға оҡшау сифаты (подражание) көсәйә: уның аҡылы синыфташтарынан, уҡытыусыларҙан (һ.б.) отоп алған һәләттәр - шаблондар менән тула. Йәғни улар һымаҡ һөйләшә, уйлай, эшләй, хатта атлай, кейенә һ.б. Ғөмүмән, уның индивидуаллеге тулыһынса тиерлек юҡҡа сыға. Бигерәк тә йәнле (ижади) фекерләүе фекерләү шаблондары менән алмашыныуы бала өсөн ҡурҡыныс.***

***✓ Баҡһаң, егерменсе быуаттың башында башҡорттар бөтөнләй һүгенмәгән икән... Сөнки башҡорт теленең аңды таҙартыу һәләте бик көслө. Ә рухи һәм физик яҡтан да сәләмәт кешеләрҙә һүгенеү һүҙҙәренә ихтыяж булмай.***

# ТЕЛЕНЕҢ КӨСӨ

рҙар, был тормошта үҙҙәренең урындарын таба алырҙар. Әгәр инде төрлө милләттәр бергә уҡыған синыфтарҙа белем алалар икән - улар йәшел, ҡыҙыл, һары, зәңгәр (һ.б.) төҫтәрҙе бергә ҡушып бутағандан һуң килеп сыҡҡан төҫкә оҡшап ҡалырҙар...

## Башҡорт теле һәм һаулыҡ

Башҡорт теле донъяла, башҡа телдәрҙән айырмалы рәүештә, иң сәләмәт телдәрҙең береһелер. Йәғни башҡорт телендә һөйләшкән кешеләр психик һәм физик ауырыуҙарға бирешеп бармай. Ни өсөн икәнен яҡшыраҡ аңлатыу өсөн һүҙемде алыҫтаныраҡ башлайым әле.

...Көнсығыш илдәрендә, кеше ауырыуҙарының етмеш проценты аңдың боҙолоуынан башлана, тигән ҡараш йәшәй. Улар уны былайыраҡ аңлаталар: аң менән тән араһында туранан-тура бәйләнеш бар, хатта тән ағзалары аңдың дауамы, тип тә әйтәләр. Шуға аң боҙола икән, тән дә ауырый башлай. "Сәләмәт тәндә сәләмәт рух" ҡына түгел, ә, киреһенсә, рухың сәләмәт булһа, тәнең дә сәләмәт була икән ул.

...Аң боҙолоуының бер сәбәбе - психик көсөргәнешлелек. Әйтергә кәрәк, ул һәр кешелә була торған тәбиғи күренеш. Унан ҡурҡырға ярамай. Сөнки ул көсөргәнешлелек төрлө тәбиғи юлдар менән көн һайын юҡҡа сыға бара. Ләкин ҡайһы бер кешеләрҙә ниндәйҙер сәбәптәргә бәйле юҡҡа сыҡмай, киреһенсә, көсәйеп, тамыр йәйергә мөмкин. Артабан инде ундай психик торош аңдың боҙолоуына килтерә. Мәҫәлән, ундай кеше үҙ тормошо менән риза булмай башлай, уға һәр ваҡыт нимәләр етмәй, буш юҡҡа ҡыҙа, асыулана, көнләшә, нәфрәтләнә... Аңдың бындай торошо аҡрынлап тәндә лә сағыла башлай һәм кешелә физик ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, асыуланыу һәм үсләшеү ғәҙәткә инһә, бауырҙа ниндәйҙер сир барлыҡҡа киләсәк; көнләшеү көсәйһә - баш һәм ашҡаҙан ауырыуҙыры; йыш ҡайғыра башлаһаң - үпкә һәм тын юлдары боҙоласаҡ (һ.б.)...

Әлбиттә, хәҙерге медицина ундай психик көсөргәнешлелекте дауалауҙың юлдарын өйрәнә, төрлө дарыуҙар тәҡдим итә. Ә бына баяғы көнсығыш илдәрендә, мәҫәлән, Һиндостанда, Ҡытайҙа шул күренеште бөтөрөү өсөн үҙҙәренең юлдарын уйлап тапҡандар. Ул медитация тип атала (Әлбиттә, медитацияның маҡсаты уның менән генә сикләнмәй). Әйтергә кәрәк, уның менән шөғөлләнеү көнсығышта ғына түгел, хәҙер Европа һәм Америка илдәрендә лә бик популяр булып китте. Рәсәйҙә лә уның менән шөғөлләнеүселәрҙең һаны арта бара. Медитацияның шулай популяр төҫ алыуы уның файҙалы булыуын иҫбатлайҙыр.

Медитацияның төрҙәре йөҙҙән ашыу. Тел һәм һаулыҡ тураһында һүҙ йөрөткәс, беҙҙе уларҙың араһындағы өндәр менән эш иткәндәре ҡыҙыҡһындыра. Әйтергә кәрәк, медитация өлкәһендә улар ҙур урынды биләй. Мәҫәлән, Һиндостанда шундай төрөн "Вак шуддхи" тип атайҙар. Шулай уҡ "Тарабара" тигәне бик күп илдәрҙә популяр булып һанала.

Башта шул төр медитацияларҙың ҡайһы бер теоретик нигеҙҙәренә туҡталайыҡ. Улар бөтәһе лә шуны иҫбатлай: беҙҙең телмәрҙә ҡулланылған өндәр аңды таҙарта, уның көсөргәнешлелеген бөтөрә икән. Иң мөһиме: ниндәйҙер бер өндөң "эшен" икенсе өн башҡара алмай; мәҫәлән, "а" өнө таҙарта алған көсөргәнешлелекте, әйтәйек, "ҙ" өнө эшләй алмай; ә "ҙ" өнөнөкөнә "ө" өнө хужа түгел һ.б. Йәғни һәр өндөң үҙ таҙартыу өлкәһе бар. Иң мөһиме: өндәр күп ҡулланылған телдәрҙә аңдың таҙарыуы тәбиғи рәүештә бара.

Әгәр инде телмәрҙә өндәр әҙ ҡулланылһа, ундай телдә һөйләшкән кешеләр психик көсөргәнешлеккә тиҙ бирешеүсән була. Шуға уларға медитация менән шөғөлләнеү бик файҙалы. Уның өсөн төрлө алымдар уйлап сығарылған. Мәҫәлән, "ОМ", "АУМ", "АМИН" кеүек өндәр йыйылмаһын (мантра) яйлап һәм һуҙып әйтеү бөтә донъяға таралғандыр, тип уйлайым. Ә бына "Тарабара" тигәне башҡаларҙан ябайлығы менән айырылып тора. Ябай тип әйтәм, сөнки уның менән һәр теләгән кеше шөғөлләнә ала, һөҙөмтәле лә булып иҫәпләнә. Хатта уның ҡайһы бер алымдары психотерапияла ла актив ҡулланыла. Бына береһенең методикаһы ошолайыраҡ: кеше күп итеп өндәр әйтергә тейеш. Үҙ телендә булғандарын да, шулай уҡ булмағандарын да. Ни тиклем күберәк өндәр әйтһәң, шул тиклем кеше психикаһы өсөн файҙалыраҡ.

Хәҙер башҡорт теленә киләйек. Беҙҙең алфавитыбыҙҙа бөтәһе 42 хәреф бар... Татар һәм удмурт телендә - 38, рус телендә - 33, сыуаш телендә - 32, инглиз, француз һәм немец телдәрендә 26 хәреф иҫәпләнә. Нисек уйлайһығыҙ, медитация күҙлегенән ҡарағанда, ҡайһы тел аңды яҡшыраҡ таҙарта?

> ***Беҙҙең алфавитыбыҙҙа бөтәһе 42 хәреф бар... Татар һәм удмурт телендә - 38, рус телендә - 33, сыуаш телендә - 32, инглиз, француз һәм немец телдәрендә 26 хәреф иҫәпләнә. Нисек уйлайһығыҙ, медитация күҙлегенән ҡарағанда, ҡайһы тел аңды яҡшыраҡ таҙарта? Әлбиттә, башҡорт теле. Беҙҙең телебеҙҙә, әйтергә кәрәк, донъя телдәрендә булған бөтә өндәр ҙә бар тиерлек. Шулай уҡ Урал тәбиғәтендә ишетелгән бөтә тауыштарҙы ла башҡорт телмәренән табырға була. Ғөмүмән, башҡорт теле - медитатив тел. Был телдә һөйләшкән башҡорттарҙың аңы көн һайын "бысраҡ"тан таҙартыла. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорт теле - ысын мәғәнәһендәге аңдың тәбиғи иммунитеты.***

Әлбиттә, башҡорт теле. Беҙҙең телебеҙҙә, әйтергә кәрәк, донъя телдәрендә булған бөтә өндәр ҙә бар тиерлек. Шулай уҡ Урал тәбиғәтендә ишетелгән бөтә тауыштарҙы ла башҡорт телмәренән табырға була. Ғөмүмән, башҡорт теле - медитатив тел. Был телдә һөйләшкән башҡорттарҙың аңы көн һайын "бысраҡ"тан таҙартыла. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорт теле - ысын мәғәнәһендәге аңдың тәбиғи иммунитеты.

Шулай уҡ башҡорт телендә парлы өндәрҙең өҫтөнлөк итеүе лә кеше психикаһы өсөн файҙалы. Беҙ башҡорт телендә һигеҙ парлы тартынҡы бар, тип һөйләргә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Ә бына өҫтәнерәк, дөйөм өндәр күҙлегенән ҡарағанда, улар күберәк. Әйҙәгеҙ, ҡарайыҡ әле: б-п, д-т, в-ф, з-с, ҙ-ҫ, к-г, ҡ-ғ, ж-ш - былары традицион парлы өндәр (тартынҡылар), артабан дауам итәм: а-ә, о-ө, у-ү, ы-и, н-ң, һ-х... Башҡорт алфавитындағы 42 хәрефте өндәргә әйләндерһәң, 36 өн буласаҡ. Йәғни я, ю, е, ё, ъ, ь хәрефтәрен һанамайбыҙ. Шулай итеп, 36 өндөң 28-е парлы, йәғни аҙаҡҡылары өҫтөнлөк итә. Нимә ул парлы өндәр? Образлы итеп әйткәндә, улар ике яҡта тороп, тигеҙлекте һаҡлаусы өндәр: бер яҡта - ҡалын, икенсе яҡта - нәҙек һуҙынҡылар, шулай уҡ бер яҡта - яңғырау, икенсе яҡта һаңғырау тартынҡылар (һ.б.) урынлашҡан. Бына ошо парлы өндәр өҫтөнлөк иткән башҡорт телмәре шул телдә һөйләшкән кешеләрҙең психикаһындағы тигеҙлекте - балансты барлыҡҡа килтерә. Кешене психик яҡтан бер яҡҡа "кыйшайып" китеүҙән тотҡарлай.

Бына шуға башҡорттар тыныс холоҡло, ипле һәм донъялары теүәл булыуҙары менән башҡа халыҡтарҙан айырылып тора. Киң күңелле, ҡунаҡсыл, ваҡ-төйәк өсөн тауыш ҡуптарып йөрөмәйҙәр. Бер ваҡытта ла үҙҙәре һуғыш башламаған, йәғни агрессив түгелдәр. Аңдары сәләмәт булғас, һаулыҡтары ла ныҡ. Әйтәйек, егерменсе быуатҡа тиклем беҙҙең крайҙы өйрәнгән ғалимдарҙың бөтәһе лә башҡорттарҙың сәләмәт халыҡ булыуҙарын һыҙыҡ өҫтөнә алғандар. Хәҙер ҙә бит башҡорт егеттәрен армияға ҙур теләк менән ҡабул итәләр...

Тел һәм һаулыҡ тураһында һүҙ йөрөткәс, тағы бер күренешкә туҡталып китергә кәрәктер. Көнсығыш медицинаһы буйынса, өндәр кешенең тәне һәм эске ағзалары менән дә туранан-тура бәйле икән. Уларҙың фекеренсә, һәр бер өн кешенең ниндәйҙер бер ағзаһын көйләй, уларҙың тәбиғи торошон һаҡлай. Икенсе төрлө әйткәндә, өндәр - тән ағзаларының камертондары. Мәҫәлән, "а" һәм "о" - тотош кәүҙәне көйләүсе өндәр булып һанала. Артабан дауам итһәк, "ш" - бауырҙың камертоны, "с" - үпкәнеке, "х" - йөрәктеке, "ч" - бөйөрҙәке, "м" - тын юлыныҡы... Шулай уҡ башҡорт теленә генә хас булған өндәр ҙә ниндәйҙер ағзалар менән бәйләнер, тип уйлайым. Әйтәйек, "ҫ" - "с" өнөнә, "ң" "м" өнөнә ярҙам итергә мөмкиндәр... Иң мөһиме: телмәрҙә ни тиклем өндәр күп, шул тиклем эске ағзалар өсөн яҡшыраҡтыр...

Ә бына өндәр һаны әҙ булған телдәрҙең аңды таҙартыу көсө самалыраҡ. Был күренеш шул халыҡтарҙа ниндәй сифаттарҙы барлыҡҡа килтереүен аҡылы булған кеше үҙе уйлап белә ала. Ғөмүмән, һәр милләттең үҙенә генә хас психологияһы һәм характеры бар икән, уларҙы формалаштырыуҙа әсә теленең роле бик ҙур.

Тағы бер ҡыҙыҡлы ғына күренешкә иғтибар итәйек. Телдәрҙә алфавиттарындағы өндәр һаны кәмей барыу сиратында ҡараһаң, уларҙың лексикаһында һүгенеү һүҙҙәренең арта барыуын күрергә була. Уның дөрөҫлөгөн иҫбатлау өсөн рус теленең йәнле һөйләү стилен иҫкә төшөрөү ҙә етә. Ә инглиз телендә рус теленекенән дә күберәктер. Мәҫәлән, күренекле яҙыусы Джек Лондон ике инглиз матросының һөйләшеүе тураһында бер иҫтәлек яҙып ҡалдырған. Ул уларҙың һөйләшеүен тыңлап, хайран ҡала: телмәрҙәре тулыһынса тиерлек һүгенеү һүҙҙәренән тора, хатта берәүһен егерменән артыҡ мәғәнәлә ҡуллана алғандар.

Телдәрҙә булған бындай күренештәрҙең сәбәбе ябай ғына: тел аңды тулыһынса таҙарта алмағас, һүгенеү һүҙҙәре ярҙамға килгән - етешмәгән өндәрҙе улар компенсациялай. Нимәгәләр асыу килгәндә һүгенеп ебәрһәң, рәхәт булып ҡала, тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә була. Ысынлап та, дөрөҫ. Мәҫәлән, аңдағы психик көсөргәнешлелектең күп кенә өлөшөн тамаҡ төбөндә барлыҡҡа килгән өндәр таҙартырға тейеш. Башҡорт телендә улар бишәү: х, ғ, ҡ, һ, ң, ә рус телендә бер "х" өнө генә. Күреүебеҙсә, рус теле тамаҡ төбөндә яһалған өндәргә ҡытлыҡ кисерә. Бына уларҙың урынына тамаҡ төбөнән әйтелгән һәм "х" өнө менән башланған һүгенеү һүҙҙәре ярҙамға килә лә инде. Әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа рус психологтары үҙҙәре һүгенеүҙең кеше психикаһы өсөн файҙалы булыуын фәнни яҡтан иҫбатлай башланылар. Хатта уларҙың был туралағы хеҙмәттәрен хәҙер китап магазиндарында йәки киоскыларында табырға була.

Ә башҡорт телендә бөтөнләй һүгенеү һүҙҙәре булмаған. Быны бигерәк тә оло быуын кешеләре раҫлай ала, тип уйлайым. Мәҫәлән, олатайымдың һөйләгәнен иҫкә төшөрөп үтәйем әле. Улар бәләкәй саҡта ауылға ниндәйҙер эш менән килгән урыҫтарҙың арттарынан эйәреп йөрөргә яратҡан. Бәләкәй малайҙар өсөн уларҙың һүгенеп һөйләшеүҙәре мәрәкә булып тойолған. Баҡһаң, егерменсе быуаттың башында башҡорттар бөтөнләй һүгенмәгән икән... Ундай һүҙҙәр кәрәкмәгән дә, сөнки башҡорт теленең аңды таҙартыу һәләте бик көслө. Ә рухи һәм физик яҡтан да сәләмәт кешеләрҙә һүгенеү һүҙҙәренә ихтыяж булмай.

Бына шуның өсөн дә мин башҡорт телен донъялағы иң сәләмәт телдәрҙең береһе тип атайым. Әйткәндәй, көнсығыш фәлсәфәһе күҙлегенән ҡарағанда, башҡорт теле генә түгел, башҡорт йыры ла, башҡорт ҡурайы ла, башҡорт бейеүе лә медитатив күренештәр...

## Йомғаҡлау урынына...

Башҡорт теленен, йәғни әсә теленең көсө былар менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Ул океан һымаҡ киң һәм тәрән. Минең был мәҡәләмдәге яҙғандарым шул океандан алынған бер ус һыу ғына ул. Ә бына тоҙлораҡ әллә тоҙһоҙораҡ урыны булдымы, уныһын әле белмәйем - уҡыусылар нимә әйтер. Ғөмүмән, башҡорт теленең өйрәнелгәне менән бергә өйрәнелмәгән өлкәләре лә бихисап. Минең уйымса, шул өлкәләргә ингән һайын, әсә теленә булған ихтирам көсәйә генә барасаҡ...

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы.**

✓ ***Ырымбур гөбөрнәһендә бик күп башҡорт йәшәй. Уларҙы ҡараҡ, уғры тиҙәр. Ысынлап та баш бирмәҫ, үҙҙәренең һүҙенән башҡаны ишетмәҫ халыҡ ул. Баш күтәреүҙәре менән батшалыҡты йонсотҡан бәндәләр.***



Париждағы хөкүмәткә был бик кәрәк. Республиканың сығымдарын ҡаплатыр өсөн генә түгел, хөкүмәттә ултырған чиновниктарҙың кесәһен ҡалынайтырға ла кәрәк. Алтын һөт һауҙырған һыйырҙы һуйыу енәйәт булыр ине. Алтын шишмәһенә әүерелгән Бонапартты шул урындан ситләштереү ҙә баяғы һыйырға тиң бит. Шуға Наполеондың үҙҙәренә оҡшамаған бик күп яҡтарына күҙ йоморға тейеш булалар.

Бонапарт Австрияның королен солох килешеүенә күнергә мәжбүр итә һәм бер айға яҡын барған һөйләшеүҙәрҙән һуң Кампформ ауылында килешеүгә ҡул ҡуялар. Франция яғынан уға Бонапарт, Австриянан - илсе Кобенцль ҡул ҡуя. Килешеү нигеҙендә Францияға бик күп ер биреләһәм илдең көнсығыш сиге Рейн йылғаһы буйлап һуҙыла (әле лә шулай).

Бонапарт һуғыша, ә ҡатыны Жозефина ирен ялан шарттарында көтә. Наполеон ғәскәргә етәкселек иткәндә үҙен һалдаттарҙан айырмай. Бер ҡаҙандан ашай, берҙәй үк ҡыуыштарҙа йоҡлай. Жозефинаны ла шундай уҡ ҡыуышҡа килтереп төшөрә. Париж дворяндары йәшәгән һуш китмәле шарттарға күнеккән ҡатын өсөн ҡыуышта йоҡлау, һалдат бутҡаһын ашау үлем менән бер була, әммә ҡатын тешен ҡысып түҙә. Уның ҡайһылайтып яҙаланғанын күргән ире үҙен әрләй. Һөйөклө кешеһенә әҙәмсә шарттар тыуҙырмағанына үҙен битәрләй һәм Миланға килеп еткәс, ҡаланың ситендәге ҙур һарайға урынлаша. Шарттар бында Париждағынан кәм түгел. Һөйкөлөнөн күңеле булһын тип, Наполеон көн һайын тигәндәй шаулы кисәләр ойоштора. Шарап бында йылға булып аға, Наполеондың енеүҙәрен маҡтаған тостарҙың башын да, аҙағын да белеүсе булмай.

## 1798 йыл

Наполеон Бонапарт 1798 йылдың алтын ҡояшлы майында яңы еңеүҙәр, яңы байлыҡ, яңы дан артынан ҡыуып, ғәскәре менән Египетҡа сығып киткәйне. Әлбиттә, Наполеон донъяның Египет йәки Сирия менән генә сикләнмәй икәнләген, ер шарының яҫы түгел, түңәрәк икәнлеген белә ине. Әммә Египеттан һуң тағы ла нindәй илдәр барлығын белеп бөтөрмәне, әле ул баҫып алырға ниәтләп килгән ғәрәптәрҙән тыш тағы ла бер мосолман халҡы барлығын һәм уның исеме башҡорт икәнлеген белмәне. Белгән дә булыр ине, әгәр кәрәге сыҡһа. Әлегә ундай хәжәт тыумағайны.

Башҡорттар үҙ батшаһына ҡаршы туҡтауһыҙ тигәндәй һуғышып, арып, аҙ ғына тын алырға туҡтаған саҡ ине. Улар үҙҙәре лә, былар күтәрелгән һайын баштарына һуғып, баҫтырып торған батша хакимлығы ла башҡорт һуғышынан ялҡып бөткәйне. Шул саҡта Павел Беренсе батшаға:

- Һеҙҙең фарман буйынса Ырымбурҙың хәрби гөбөрнаторы Игельстром Иосиф Андреевич килде! - тип ҡысҡырып әйтте йомошсо.

- Инһен.

Оҙон буйлы асҡаҡ яңаҡлы йоҡа иренле генерал күкрәгендәге ордендарын ялтыратып килеп инде.

- Һаулыҡ һәм уңыштар бирһен һеҙгә Хоҙай, ғали йәнәптәре.

Батша үҙе ултырған өҫтәлдең һул ҡабырғаһынан урынға ымланы:

- Ултыр. Һинең отставка һорап яҙған ҡағыҙыңды уҡыным. Батшаңа хеҙмәт итеп арыныңмы, ялға кҫсмәксе булаһыңмы?

- Ғали йәнәптәре! - Генерал ырғып торҙо.

- Ултыр тинем бит мин һиңә. Ҡуҡаннама!

- Юҡ, батшаға хеҙмәт итеүҙән арыу мөмкин түгел, ғали йәнәптәре. Һаулыҡ хөртәйҙе. Сирле көйө кешеләрҙе йонсотоп йөрөгәнсе, урынды бушатҡан хәйерле булыр. Йәштәргә юл кәрәк.

- Быны аңлауың хуп. Берәр төрлө үтенесең бармы?

- Үтенесем юҡ, ғали йәнәптәре. Тыңлаһағыҙ, тәҡдимем бар.

- Йә, тыңлайым.

- Үҙегеҙ беләһегеҙ, Ырымбур гөбөрнәһендә бик күп башҡорт йәшәй. Уларҙы ҡараҡ, уғры тиҙәр. Ысынлап та баш бирмәҫ, үҙҙәренең һүҙенән башҡаны ишетмәҫ халыҡ ул. Баш күтәреүҙәре менән батшалыҡты йонсотҡан бәндәләр. Өҫтәүенә, бөтән халыҡты ла батшаға ҡаршы һөскөртәләр.

- Шунан?

- Шунан, ғали йәнәптәре, әлеге шул ҫиңмайҙарҙы ауыҙлыҡларға бер сара бар.

- Нindәй?

- Улар йәшәгән ергә, уларҙың тирәһендә торған мишәрҙәргә һәм Урал казактарына кантон идараһын индерергә ине. Кантонлыҡ ярым хәрби тормош, иррегуляр әрме тигән һүҙ. Әрмелә батшаға ҡаршы түгел, старшинаға һүҙ генә әйтеп ҡара, йә яланғас арҡаһын ҡамсы менән яралар, йә төрмәгә ултырталар һәм баструкка оҙаталар. Был ғына ла аҙ, иррегуляр әрме тормошо булғас, Рәсәйҙең көньяҡ сиген һаҡлау эшен уларға ҡушып ҡуйырға, дәүләт кимәлендә һуғыш йә ситтәр менән ыҙғыш сыға икән, быларҙы туҡтауһыҙ ауға ҡыуып булла. Дөрөҫ, әле лә уларҙың хәрби хеҙмәткә бурыстары бар һәм уны улар үтәй. Ә кантонлыҡта шул эште туҡтауһыҙ башҡарасаҡтар һәм батшалыҡҡа ҡаршы сығырға әмәлдәре ҡалмаясаҡ.

- Һинең һүҙҙәреңдә мәғәнә бар. Быны шул эшеңдә бойомға ашыра башла, шунан һуң китәрһең ялға.

- Рәхмәт, ғәли йәнәптәре.

Игельстром башын саҡ ҡына аҫҡа эйеп, шап-шап атлап китте батша бүлмәһенән сыҡҡас. Петербургтағы йәшәгән йортонда бер төнлектән артыҡ ял иткәс, Сенатҡа китте. Моғайын, батшаның күрһәтмәһе быларға килеп еткәндер. Документты нисек әҙерләйҙәр икән, тип барып инде хөкүмәт йортона. Дөрөҫ самалаған булып сыкты. Игельстромды күреп тә ҡалдылар, һөрән дә һалдылар:

- Генерал әфәнде, әйҙә был яҡҡа. Һин батшаға эш ҡушып киткәнһең, хәҙер беҙ һиңә ҡушабыҙ. Ултыр, хөкүмәт указының ҡараламаһын яҙ.

Игельстром үҙенә кәрәк рәүештә документ эшләне лә, указға ҡул ҡуйҙырып алғандан һуң, шуны алып китте Ырымбурға. Был ҡалалағы беренсе эше указды тормошҡа ашыра башлау тураһында үҙенең беренсе ҡарарын яҙҙы.

**(Дауамы бар).**

КӨЛКӨФӨ

# БАШЫМДЫ ӨТӨП БИР ӘЛЕ...



- Рауил ағай, беҙҙе атырға алып бараһығыҙмы?

- Алып барам, әлбиттә, тик килһә аҙнала. Ҡырға сығып, "малокалиберная винтовка"нан атырбыҙ...

Баймаҡ интернат мәктәбендә уҡыған саҡта синыфыбыҙҙа Сәлихов Салауат исемле йор һүҙле малай була торғайны. Мәктәптә военрук булып эшләгән Рәүил Ҡунаҡбаев ағайға дәрестә шуның һымаҡ һорауҙар бирә лә, үҙе беҙҙең яҡҡа ҡарап, хәйләле йылмая. Туған әҙәбиәт дәрестәрендә йыш ҡына "аҡтар фәлән партизанды атырға алып киттеләр" тигән һымағыраҡ һуғыш эпизодтары уҡып ғәҙәтләнгәнгәме, ифрат таныш булған был һүҙбәйләнеш беҙгә мәҙәк булып тойола. Беҙ, малайҙар, уҡытыусының беҙҙе "атырға алып китеп барғанын" күҙ алдына килтереп, рәхәтләнеп көлөшәбеҙ. "Нишләп көләһегеҙ һуң?" - тип ғәжәпләнә баштa военрук. Бер аҙҙан, Салауаттың һорауының "елеген" аңлап ҡалып, үҙе лә "тәгәрәп йөрөп" көлөргә тотона... Бәғзе ваҡыт һөйләшеүебеҙҙә ана шуның һымаҡ ҡыҙыҡ һүҙҙәр сығып тора шул.

Өйҙә ябай ғына итеп аралашып йөрөгәнеңдә лә ҡайсаҡ аңғармаҫтан көлкөгә тарыйһың.

- Ә башыңды ҡайҙа ҡуйның? Хәйер, әле ҡыш бит, өйгә алып ҡайтып, балконға сығарып һалып торһаң да була инде. Моғайын, боҙолмаҫ...

- Башты ни Сибайға алып ҡайтмай, әлегә ауылда ҡалдырып торормон. Миһран ҡәйнеш үҙенең башын өткәндә, бер юлы минекен дә өтөр ҙә, һуңғараҡ килеп алырбыҙ. Өтә торған "паяльный" аппараты бар бит ҡәйнештең...

Ауылда йәшәгән ҡәйнешемә барып, һуғымға тана һуйып алып ҡайтыр алдынан хәләл ефетем менән бына ошолай итеп һөйләшеп алдыҡ, унан кинәт кенә икебеҙ ҙә бер юлы көлөп ебәрҙек. "Һуғымға һуйылған тананың башын..." тип, әллә ни һуҙылып та тормойһың бит инде һөйләшкәндә...

Бәғзе бер юморға бай яҙыусыларҙың ошоноң һымаҡ мәҙәк хәбәрҙәрҙе "ишетеп тороп", гәзиттәргә яҙып сығарғандарын да уҡығылайым. Ҡайһыларын иҫемдә лә ҡалдырам:

- Ҡыҙыңды кейәүгә биргәнһең тип ишеткәйнем. Кейәү-бала нисек?

- Кейәүҙән уңдыҡ, әхирәтем. Беҙҙең кейәүҙең ни, ауыҙ-теле юҡ, башы - алтын!..

Күп һөйләргә яратмаған аҡыллы кейәүен маҡтаусы ҡәйнәнең был һүҙҙәренең нескәлектәренә күпселектең ҡапыл да әллә ни иғтибар итмәүе лә мөмкин, әммә ауыҙыңҙ һәм телһеҙ, алтын башлы кешене күҙ алдына килтереүе ҡыҙыҡ.... Икенсе берәүҙәң: "Был бесәй ҡарт инде, беҙҙең Ҡәмәр менән бергә тыуҙы бит ул",- тиеүендә лә бәғзеләр көлкө тапҡан... Һөйләшкәндә бындай мәҙәктәр күп ваҡытта һиҙелмәй ҡала, ә инде әлегеләй "аҡ ҡағыҙға" төшә икән, шунда уҡ күҙгә ташлана.

Бала сағымда уҡыған "Һәнәк" журналдарының береһендә бер колхоздың стена гәзитендә сыҡҡан мәҡәләнән өҙөгөн килтергәйнеләр: "Колхоз эшсәндәре Петров менән Сидоров суҫҡаларҙы бик яҡшы ҡарай. Улар көнөнә 200-300 грамға арта..." Автор, әлбиттә, суҫҡаларҙың һимереүе хаҡында яҙырға тырышҡандыр, әммә беҙҙең күҙ алдына ярайһы ғына "көр" булған ике алдынғы колхозсы килеп баҫа...

Медицина институтының төп корпусында студенттар өсөн дә стена гәзите сыға торғайны. Ана шуларҙың береһендә абитуриенттарҙың урыҫ әҙәбиәте буйынса иншаларынан өҙөктәр баҫып сығарғайнылар. Бер аҙ уйламайыраҡ төҙөлгән бындай һөйләмдәрҙең барыһы ла тиерлек иҫемдә ҡалған. Гәзитебеҙ башҡорт телендә булыуына ҡарамаҫтан, уҡыусылар өсөн урыҫса "хаталар"ҙы уҡыуы ҡыҙыҡ булыр тип уйлайым, барыбыҙ ҙа мәктәптә "Русская литература" үткән кешеләрбеҙ бит: "Отелло рассвирепело и задушило Дездемону..." "Бедная Лиза рвала цветы и кормила мать..." "Князь Нехлюдов был светским человеком и мочился духами..." "Анна Каренина ехала в карете с приподнятым задом..." "Татьяна любила природу и постоянно ходила на двор..." "Татьяна копила, копила и вылила все на Онегина..." "Пушкин вращался в высшем обществе и вращал жену..." "Дубровский вышел через задний проход и уехал..." "На поле битвы слышались крики и стоны мертвецов..." "Гоголь страдал двойственностью. Она заключалась в том, что одной ногой он стоял в прошлом, а другой приветствовал будущее... (шул хәлдә торған Гоголде күҙ алдына килтерһәм, әле булһа көлкөмдө тыя алмайым). "...Тарас Бульба сказал сыну: "Чем тебя породил, тем и убью" и отошел от него на три шага..." Меҫкен абитуриент үҙенең иншаһында Тарас Бульбаның хыянатсы улы Андрийҙы ("Я тебя породил, я и убью" тип) атып үлтергән эпизодын тырыша-тырыша һүрәтләргә маташҡаны һәр кемебеҙгә аңлашыла...

Биологиянан имтихан биргән бер абитуриенттың ошондай яуабын иҫләйем: "Кишки бывают разные: толстые и тонкие, прямые и слепые, а так же двенадцативерстные..."

Табип булып хәрби госпиталдә хеҙмәт иткән дәүерҙә лә һөйләшеүгә бәйле төрлө мәҙәк хәлдәр булғылай торғайны. Тормош - һәр ерҙә лә тормош бит инде ул. Һаулығы буйынса нindәйҙер проблемалары булған хәрбиҙәр (шул иҫәптән, офицерҙарҙың ҡатындары ла) госпиталгә килгәләп тора. Ишек төбөндә "дневальный" булып торған һалдат, инструкцияға ярашлы, уларҙы туранан-тура үткәрмәй, беренсе ҡаттағы ҡабул итеү бүлмәһендә көтөргә ҡуша ла, кәрәк табипты шунда саҡырып сығара. Бер мәл, хирургия бүлегенең ординаторская бүлмәһендә ултырабыҙ. Һәр доктор, ғәҙәттәгесә, "ауырыу тарихы" яҙыу менән мәшғүл. Үҙенең шаянлығы менән билдәле булған хирург Владимир Иванович Быков, гинеколог Нина Владимировна Пермякова һәм мин - ЛОР табип. Шул саҡ, ишекте шаҡып, бүлмәгә дневальный килеп инде.

- Ней йомош, дневальный? - тип һорай докторҙарҙың береһе.

- Там, в приемном отделении к врачу Суюндукову пришла женщина с ухом...

"Ярай, көтөп торһон, хәҙер төшәм", - тинем дә, дневальный киткәс, маңлайыма "лобный рефлектор"ымды кейеп, сығырға йыйындым. Шул саҡ өҫтәл артында яҙыуын ултырған доктор Быков, яҙыуынан туҡталып, беҙгә былай ти: "Һеҙ нисегерәк уйлайһығыҙ, әгәр әлеге пациент ҡатын ЛОРға түгел, ә Нина Владимировнаға килгән хәлдә, был дневальный ошо хаҡта нисек итеп әйтер ине икән?..." Был һүҙҙәрҙе ишеткән гинекологыбыҙ тыйнаҡ ҡына йылмайып ҡуйҙы...

Уйламайыраҡ әйтелгән һүҙҙәргә ана шундай үткер яуапты "кеҫәһендә генә" йөрөткән кешеләр һәр ерҙә осрап тора бит ул. Шул саҡ госпиталдә бүлексә мөдире буларак табиптар менән шәфҡәт туташтарын әлеге ординаторҙар бүлмәһенә йыйып, сираттағы "пятиминутка" үткәрәм. Шунан алдараҡ ҡына, үҙемдең бүлекте - ауырыуҙар ятҡан палаталарҙы, йыуыныу бүлмәһен, хатта бәҙрәфтәрҙе лә йәһәт кенә ҡарап, тикшереп сыҡҡайным. Табылған етешһеҙлектәр буйынса өлкән шәфҡәт туташына күрһәтмәләр бирәм:

- Галина Константиновна, у вас в женском туалете света нет. Как вы там ориентируетесь в темноте?

- По звуку...

Был шаян шәфҡәт туташының яуабына шундай етди кәңәшмә мәлендә бөтә бүлмә шау-гөргә күмелде. Тыйыла алмай, улар менән бергә үҙем дә көлөргә мәжбүр булдым. Еткәсе буларак уға: "Бәҙрәфегеҙҙәге ҡыйы өҙөлгән лампочканы алыштырығыҙ", - тип ябай ғына итеп әйтһәм дә була бит инде...

Бына шулай, тормошобоҙ гел һоро төҫтә, күңелһеҙ генә бармай. Бәғзе ваҡыт көлгәләп тә алабыҙ, хатта көлкөгә лә ҡалабыҙ...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ДӨРӨҪ ЙӘШӘ!

■ Инфаркт, шәкәр диабеты, стенокардия, ҡан тамырҙары ауырыуҙары дөрөҫ йәшәү рәүешен күҙәтмәү һәм һимеҙлек һөҙөмтәһендә килеп сыға, тип иҫәпләргә күнегеп киткәнбеҙ. Шулай ҙа күп тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, Шотландия ғалимдары сәләмәтлек өсөн һимеҙ булыу күпкә яҡшыраҡ икәнен раҫлаған. Бер туҡтауһыҙ диеталарҙа ултырып, йә ябығып, йә һимереп йәшәүселәр ғүмер оҙайлығын 25 процентҡа ҡыҫҡарта икән. Сөнки был йөрәк һәм ҡан тамырҙары сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай, был саҡта йөрәк өйәнәгенән үлеү хәүефе 30-90 процентҡа арта. Ғалимдар был күренеште йо-йо эффекты тип атаған. Йо-йо эффекты онкологик сирҙәргә лә килтерә.

■ Яуаплы имтихандар, сессия мәлендә барлыҡ студенттар, уҡыусылар бер төн эсендә бар мәғлүмәтте хәтеренә һеңдерергә ярҙам итеүсе саралар тураһында хыяллана. Белгестәр был мәлдә какао эсергә кәңәш итә. Уның файҙаһы тураһында боронғо индеецтар ҙа белгән. Юҡҡа ғына шоколад көслө биостимулятор иҫәпләнмәй. Борон шуға ла мөһим һынауҙар алдынан яугирҙарға какао биргәндәр. Әле лә уҡыусылар араһында шундай фекер таралған, йәнәһе, имтихан алдынан шоколад ашаһаң, баш яҡшыраҡ эшләй. Ысынында иһә шоколад әллә ниндәй файҙа бирмәй, баш мейеһе эшмәкәрлеген әүҙемләштереү өсөн какао эсергә кәрәк. Какао составында теобромин һәм ҙур күләмдә антиоксиданттар бар. Ул баш мейеһе ҡан әйләнешен яҡшырта, һөҙөмтәлә реакция, хәтер, мәсьәләләрҙе хәл итеү яҡшыра, кәйеф күтәрелә, депрессия синдромы юҡҡа сыға.

■ Баш мейеһе өсөн балыҡҡа ҡарағанда емеш-еләктәр файҙалыраҡ. Бигерәк тә көртмәле, ҡурай еләге, ҡара бөрлөгәндә антиоксиданттар һәм биофлавоноидтар күп. Көртмәле Альцгеймер сирен иҫкәртеүсе булып тора, сөнки баш мейеһенең ҡартайыуы менән көрәшә. Ыңғай сифаттары яғынан ер еләге лә көртмәленән ҡалышмай. Ҡара һәм йәшел сәй ҙә баш мейеһен әүҙемләштерә. Экзотик ризыҡтар араһында авокадоға иғтибар бирергә кәрәк. Унда майлы кислоталар күп, улар ҡан әйләнешен яҡшырта. Авокадо составындағы калий ҙа баш мейеһе эшмәкәрлегенә бик кәрәк.

■ PLOS ONE журналы яҙыуынса, ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙҙарҙың хис-тойғоларын аңлауы ныҡ ҡыйын. Индиана университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, гүзәл заттың йылмайыуын да ир-егет дөрөҫ аңламай. Һынауҙарҙа 21 йәштән 52 йәшкә тиклемге 22 ир-егет ҡатнашҡан, улар магнит-резонанс томография ярҙамында тест үткән. Был исул мейенең әүҙемлеген билдәләргә мөмкинлек бирә. Уларға күҙҙәр төшөрөлгән һүрәттәрҙе ҡарап, уларҙа ниндәй тойғолар сағылыуын белергә кәрәк булған. Фотоларҙа кеше хис-тойғоларының бөтөн спектры - ыңғайы ла, киреһе лә сағылған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙҙың тойғоһон аңлар өсөн күп ваҡыт кәрәк. Етмәһә, фотола ир-егеттең күҙҙәре һүрәтләнгән саҡта уларҙың баш мейеһенең хистәр менән бәйле өлөшө әүҙемләшеп киткән. Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың күҙенә ҡарағанда баш мейеһенең хис-тойғолар һәм ҡылыҡтар менән бәйле өлөшө ныҡ әүҙемләшмәгән. Ғалимдар билдәләүенсә, көслө зат ҡатын-ҡыҙҙың тойғоларын насар "уҡый", етмәһә, улар үҙ заты вәкилдәре тойғоларына мәрхәмәтлерәк икән.

ДИАЛОГ

# БАЛАЛАРЫҢДЫ...

## туған телдән мәхрүм итмә, атай-әсәй!

**Булған бит заманалар: балаларҙы "ите һинә, һөйәге миңә" тип шул ваҡыттағы уҡымышлы муллалар, мөәзиндәр ҡулына тапшырғандар ҙа - эш тә бөткән. Бөгөн иһә белем биреү системаһы үҙе бер ҡатмарлы механизм - уның эшендә ғалимдар, махсус белемле педагогтар ғына түгел, хатта ата-әсәләр ҙә ҡатнаша һәм ошо механизмдың уңышлы эшләүенә ярҙам итергә тырыша. Бынан өс йыл элек Башҡортостанда ҡайһы бер башҡа милләт ата-әсәләренең мәктәптәрҙә республикаға исем биргән халыҡтың - башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы сығыш яһауы башҡорт телле ата-әсәләрҙең әүҙемләшеүенә этәргес бирҙе, уларҙың иң рухлылары бергә тупланып, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағында Республика башҡорт ата-әсәләре комиссияһын ойошторҙо. Августа улар баш ҡалала үҙ форумын үткәрәсәк. Форум алдынан Республика башҡорт ата-әсәләр комиссияһы рәйесе урынбаҫары Айгөл АТАНОВА һәм Өфө ҡалаһының башҡорт ата-әсәләре комиссияһы рәйесе Рәмил ҠОЛТАЕВ менән эшләнгән эштәргә йомғаҡ яһап, киләсәккә пландары менән танышабыҙ.**

**➔ Ата-әсәләр комиссияһы башҡорт телен, йәғни уны мәғариф учреждениеларында туған тел булараҡ өйрәнеүҙе һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы яҡлау маҡсатында ойошторолдо бит инде. Ошо йылдарҙа ул үҙенең маҡсатына өлгәштеме, башҡорт теле алдында торған тағы ла ниндәй проблемаларҙы асыҡланы?**



Айгөл Атанова: Ата-әсәләр комиссияһы 2018 йылдан алып эшләй һәм уның ойошторолоуына өс йыл ярым булып бара. Һөҙөмтәләр бик күп тигергә мөмкин, сөнки ошо ваҡытта ата-әсәләр менән йыйылышып, һөйләшеп, кәңәшләшеп, мәғариф системаһын координациялаусы дәүләт органдарына тәҡдимдәр, талаптар индерелде, күп кенә үҙгәрештәргә юл һалынды, башҡорт теленә иғтибар артыуы күҙәтелә, күп кенә саралар уҙғарыла башланы һәм нимә генә тимәһендәр - телдең позициялары нығынып бара. Әлбиттә, барыһы ла беҙ теләгәнсә түгел, күп кенә проблемалар бар, уларҙың иң мөһиме - ата-әсәләрҙең һәм балаларҙың үҙ туған теленә битарафлығы.

Бөгөн закон буйынса ата-әсәләр - балиғ булмаған балаларҙың рәсми вәкилдәре - белем биреү учреждениеларында туған телде һайларға хоҡуҡлы һәм улар үҙҙәренең хоҡуҡтарын ғариза аша белдерергә тейеш. Әммә күп кенә ата-әсәләр ошо хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыуҙан баш тарта, балаһының туған телен өйрәнеүенә аяҡ сала. Бында система ла ғәйепле түгел, күп нәмә урындағы белем биреү учреждениеһы хакимиәтенә, уҡытыусыларға, райондарҙың мәғариф бүлегенә бәйле, сөнки ата-әсәләргә дөрөҫ мәғлүмәт бирелмәй, бөтә иғтибар БДИ-ға ғына йүнәлтелә, ата-әсәләрҙең хоҡуҡтары һаҡланмай. Әлбиттә, ата-әсәләрҙән дә күп нәмә тора, улар аңлы булырға, балаларына үҙ туған телен өйрәнеүҙе һайларға бурыслы. Әммә был юҫыҡта әле эшләйһе эштәр күп, үкенескә күрә, ата-әсәләргә туған телдә уҡытыуҙың әһәмиәтен бер туҡтауһыҙ аңлатыу талап ителә.

Шулай уҡ алда башҡа мәсьәләләр ҙә тора. Ул да булһа башҡорт телен уҡытыуҙы заманса камиллаштырыу һәм матур, яҡшы әсбаптар, яңы методикалар булдырыу, уларҙы ҡулланыу; башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү еңел, ҡыҙыҡлы булһын, башҡа милләттәр уны һөйләшеү кимәлендә өйрәнә алһын өсөн ошо юҫыҡта ла күберәк эшләргә кәрәк. Бында алдыңғы ҡарашлы тел ғилеме белгестәрен туплап, бер нисә төрлө методика эшләү зарур: уларҙы һайлап алыу мөмкинлеге булһын, улар заман талаптарына яуап бирһен, балаларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙырһын

Әлбиттә, беҙ балалар баҡсаларында ла күберәк башҡорт төркөмдәре асылһын, мәктәптәрҙә Башҡортостан тарихы, башҡорт әҙәбиәте ентекле уҡытылһын һ.б. тип теләйбеҙ, әммә ысынбарлыҡта улай килеп сыҡмай. Эш бик яй бара. Ата-әсәләр комиссия тураһында ишетеп, үҙҙәренең проблемалары менән мөрәжәғәт итә, беҙ уларға ярҙам итергә тырышабыҙ. Күп осраҡта ата-әсәләргә үҙҙәренең хоҡуҡтарын яҡлап бик күп инстанциялар тупһаһын тапарға тура килә. Бының менән нимә тип әйтергә теләйем: закон бар, хоҡуҡтар унда асыҡ яҙылған, әммә улар эшләмәй, һөҙөмтәлә ата-әсәләр законда гарантияланған хоҡуҡтарын ҡуллана алмай. Башҡорт балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәрен астырыу булһынмы, мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүсе төркөм туплау булһынмы - артынан юллап оҙаҡ йөрөргә тура килә. Кемдәрҙеңдер ошо ваҡытта күңеле төшә, бәгзеләр тырышлығы, ныҡышлығы менән маҡсатына өлгәшә, әммә артабан да бик күп проблемалар тыуып тора.

*Ата-әсәләр комиссияһы ойошторолоуы, әлбиттә, райондарҙа, ҡалаларҙа ата-әсәләрҙе берләштереүҙә һәм урындарҙа ата-әсәләр комитеттары ойоштороуҙа ҙур роль уйнаны. Ата-әсәләр быға тиклем үҙҙәренең хоҡуҡтарын белеп етмәһә, хәҙер улар законлы рәүештә башҡорт телен уҡытыуҙы һайлап, балаларына башҡорт телен законлы рәүештә уҡытыуҙы талап итеү юлдарын белә. Беҙ тап ана шул эште алып барабыҙ ҙа инде. Шулай уҡ ҙур проблема булып торған балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре асыу, ул ғына ла түгел, башҡорт балалар баҡсалары асыу проблемаһы менән дә шөғөлләнәбеҙ.*

Рәмил Ҡолтаев: Ата-әсәләр комиссияһы ойошторолоуы, әлбиттә, райондарҙа, ҡалаларҙа ата-әсәләрҙе берләштереүҙә һәм урындарҙа ата-әсәләр комитеттары ойоштороуҙа ҙур роль уйнаны. Ата-әсәләр быға тиклем үҙҙәренең хоҡуҡтарын белеп етмәһә, хәҙер улар законлы рәүештә башҡорт телен уҡытыуҙы һайлап, балаларына башҡорт телен законлы рәүештә уҡытыуҙы талап итеү юлдарын белә. Беҙ тап ана шул эште алып барабыҙ ҙа инде. Икенсенән, беҙ мәктәп тураһында ғына һөйләмәйбеҙ, бөгөн шулай уҡ ҙур проблема булып торған балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре асыу, ул ғына ла түгел, башҡорт балалар баҡсалары асыу проблемаһы менән дә шөғөлләнәбеҙ. Эш барышында мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында башҡорт балаларына урын етмәү проблемаһы ла асыҡланды. Бөгөн Өфө ҡалаһында, республиканың башҡа ҡалаларында, ауылдарҙа башҡорт төркөмдәре асыла. Был, әлбиттә, ата-әсәләрҙең уларҙы нисек асыу, нисек документация йыйыу тураһында хәбәрҙар булыуына бәйле.

**➔ Башҡортостан башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә лә башҡорт балаларын башҡорт төркөмдәрендә тәрбиәләү, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләрен күҙ уңында тота. Күрше өлкәләрҙә башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытыу ниндәй кимәлдә ҡуйылған, уларҙа ниндәй проблемалар бар?**

Айгөл Атанова: Күрше өлкәләр буйынса тулы мәғлүмәт бирергә мөмкинлегебеҙ юҡ, сөнки төрлө ерҙә үҙенә генә хас проблемалар бар, был турала Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығы белгестәре күберәк белә. Бөтөн донъя башҡорттары Башҡарма комитеты белгестәре күрше өлкәләр менән эшләй ул. Беҙ ҙә үҙ сиратыбыҙҙа быйыл күрше өлкә ата-әсәләре менән онлайн осрашыуҙар ойоштороҙоҡ. Башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә белем усаҡтарында башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү хоҡуҡына эйә булһалар ҙа, бөтә ерҙә лә бындай мөмкинлек тыуҙырылмай, ниндәйҙер ҡаршылыҡтар булып тора. Мәҫәлән, Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ ҡалаһында быйыл йәкшәмбе мәктәбен асырға мөмкинлек бирмәнеләр, әммә ата-әсәләр

2019 йылдан балаларына туған телде уҡытырға тырыша. Былтыр бер аҙ уҡытыу мөмкинлеге килеп тыуғайны, әммә педагогтар проблемаһы һәм кластар етмәгәнлектән, улар туған телен факультатив итеп кенә ойоштороҙо. Ғөмүмән, сит өлкәләрҙә туған тел булараҡ башҡорт теле факультатив йәки түңәрәк рәүешендә аҙнаһына бер-ике тапҡыр ғына үтә. Быйыл Сургутта, Нижневартовскиҙа, Ҡурған һәм Силәбе өлкәләрендә, Пермь крайында йәкшәмбе мәктәптәре асылды.

Эйе, законға ярашлы, туған телде уҡытыу һәр мәктәптең уҡыу планында бар, әммә әле башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә быға бер кем дә өлгәшмәне, тип әйтергә мөмкин. Бик йыш был эш әүҙем ата-әсәләрҙең инициативаһы булып ҡына ҡала һәм уларҙың энтузиазмы арҡаһында ғына йәкшәмбе мәктәбе йәки түңәрәк сиктәрендә генә тормошҡа ашырыла.

**Рәмил Ҡолтаев:** Әлбиттә, бында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының урындағы бүлексәләре, уларҙың рәйестәре һәм активы менән берлектә эш алып барабыҙ. Тағы шуны әйтер инем: беҙҙән өлгө алып, башҡа милли республикаларҙа ла шундай уҡ комиссиялар ойошторола башланы. Улар бәйләнешкә сығып, онлайн осрашыуҙар үткәреп, үҙҙәренең туған телдәрен һаҡлау һәм яҡлау эшенә тотондо. Был да ҙур эш, сөнки беҙ беренселәр булдыҡ. Беҙгә ҡарап, беҙҙән өлгө буйынса эшләйҙәр икән, тимәк, был бик кәрәкле эш.

➔ **Ата-әсәләр комитеты Башҡортостан район-ҡалаларында ла үҙенең эшен киң йәйелдерҙе, әммә хатта ауыл ерҙәрендә йәшәгән ата-әсәләр ҙә балаларын башҡортса уҡытыуҙан баш тартҡан осраҡтар күбәйҙе. Уларҙың хатаһын төҙәтеү өсөн нимәләр эшләнә, ни өсөн ата-әсәләр балаһына рус телен уҡытырға, ә башҡорт телен ғаилә теле итеп кенә ҡалдырырға тырыша?**

**Рәмил Ҡолтаев:** Үкенескә күрә, был проблема хатта төпкөл райондарҙа-ауылдарҙа ла күҙәтелә. Башҡорт ауылдарында ла ата-әсәләр балаларын рус теленә өйрәтергә тырышып торған ваҡытта, киреһенсә, Өфөлә йәшәгән башҡорт ата-әсәләре балаһын балалар баҡсаһында башҡорт төркөмөнә бирергә, булмаһа - астырырға, белем усаҡтарында башҡорт телен һайлап, башҡорт телендә уҡытырға тырыша. Был хатаны төҙәтеү өсөн райондарҙа, ауылдарҙа, интернет аша, социаль селтәрҙәрҙә, комиссия йыйған һәм туплаған барлыҡ мәғлүмәт, ҡулланма материалдар таратыла, ата-әсәләр ҙур ойошма булып төркөмгә ҡушылып, бер-береһенә аңлатыу эшен алып бара.

➔ **Ғөмүмән, ата-әсәләр менән эшләү һөҙөмтә бирәме?**

**Айгөл Атанова:** Әлбиттә, ата-әсәләр ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Беҙ уларға хоҡуҡтарын, мөмкинлектәрҙе аңлатабыҙ, кәңәштәр бирәбеҙ, документтар тултырырға ярҙам итәбеҙ, хаттар, ғаризалар өлгөләрен ебәрәбеҙ. Улар артабан башҡорт төркөмдәрен, башҡорт кластарын астырыу буйынса эш алып бара.

**Рәмил Ҡолтаев:** Проблема булыуы асыҡланғас, район хакимиәттәре, БР Мәғариф министрлығы хәҙер ата-әсәләргә ишетә, ярҙам итергә тырышалар. Әлбиттә, бөтә нәмә лә эшләнеп бөткән тип әйтеп булмай, әммә ата-әсәләр ҡулдарында ҙур ҡорал булыуын, ҡануниәттең уларға юл асыуын аңланы, райондарҙа, Өфөлә ата-әсәләрҙең әүҙемлеге менән балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре асыу миҫалдары ла быны раҫлай.

➔ **Яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса хәҙер дәүләт телдәре уҡыу программаһының вариатив өлөшөнән мотлаҡ өлөшөнә күсерелдә. Был мәсьәлә буйынса йәмәғәт ойошмалары, Мәғариф министрлығы менән һөйләшеүҙәр алып барыламы, дәүләт теле ниндәй предмет урынына уҡытыласаҡ йәки уны уҡытыу нисек тормошҡа ашырыласаҡ, сөнки сәғәттәр һанын арттырып булмай, ә проблеманы хәл итергә кәрәк.**

**Айгөл Атанова:** Ысынлап та, Яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса дәүләт телдәре мотлаҡ уҡытыла торған бүлеккә индерелде. Был яңы стандарттар, бер яҡтан, дәүләт теленең позицияһын нығытһа ла, бая әйтеп китеүемсә, Мәғариф министрлығы дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙы ҡыҙыҡлыраҡ итеү, методикаларҙы, ҡулланмаларҙы, әсбаптарҙы яңыртыу буйынса эш алып барырға тейеш. Был бик һәйбәт мөмкинлек, сөнки ул дәүләт телен бер ҡыйынлыҡһыҙ уҡытыуға индереү мөмкинлеген бирә. Был башҡорт телен дәүләт теле булараҡ һаҡлап алып ҡалыуға һәм артабан үҫешенә алып килер тип ышанабыҙ.

Ә инде уны ниндәй сәғәттәр иҫәбенә уҡытырға була, тигәндә, тағы бер һәйбәт яңылыҡ булды бит инде: икенсе сит ил телен өйрәнеү мотлаҡ түгел, ул уҡыу планына ата-әсәләрҙең теләге булһа ғына индерелә, һәм ошо бушаған сәғәт иҫәбенә дәүләт телен уҡытыу мөмкинлеге булыр тип ышанабыҙ.

➔ **Быйыл августа беренсе тапҡыр Республика башҡорт ата-әсәләре форумы үтәсәк тип көтөлә. Уға ниндәй өмөттәр баглайһығыҙ һәм ниндәй мәсьәләләрҙе күтәрергә, һөйләшеүҙәрҙән һуң ниндәй ҡарарҙар ҡабул итергә ниәтләйһегеҙ?**

**Айгөл Атанова:** Форум 10 август тип планлаштырылған, уға күптән әҙерлек алып барҙыҡ, өс тапҡыр грантҡа ла яҙып ҡараныҡ. Ниһайәт, быйыл хыялыбыҙ тормошҡа ашасаҡ. Уның төп маҡсаты - башҡорт ата-әсәләре хәрәкәтенең эшен әүҙемләштереү, актив, рухлы ата-әсәләрҙең белемен камиллаштырыу, үҙ хоҡуҡтарын белеп, дөрөҫ ҡулланыуын тәьмин итеү, әүҙем милләттәштәребеҙҙең һанын арттырыу, ошо хәрәкәтте киңәйтеү, уртаҡ идея менән берләшеү.

Икенсенән, ата-әсәләрҙең балаларын балалар баҡсаһына алып барғандан алып үҙҙәренең законлы хоҡуҡтарын белеп, уны дөрөҫ итеп файҙаланыу, балаларының үҙ телендә тәрбиәләнеү мөмкинлеген тормошҡа ашырыу өсөн ныҡлы, етди база булдырыу; шулай уҡ балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәрен, башҡорт мәктәптәрен, кластарын һаҡлап ҡалыу, уларҙы үҫтереү. Әгәр ата-әсәләр ошо хоҡуҡтарын барыһы ла ҡулланһа, уның үтәлеүен талап итһә телебеҙҙең киләсәге бик ышаныслы булыр ине.

Шулай уҡ был форумда тағы ниндәй маҡсат ҡуйыла: әлбиттә, әлегә булған ниндәйҙер мәсьәләләрҙе ата-әсәләр менән уртаға һалып һөйләшеп, фекер алышып, уларға булған мөмкинлектәрҙе аңлатып, булған проблемаларҙы асыҡлап, уларҙы хәл итеү юлдарын бергә эҙләп, табып, ниндәйҙер стратегия булдырырға һәм резолюция ҡабул итергә, ҡабул ителгән документтарҙы власть органдарына ғына йүнәлтергә түгел, ә улар менән бергә эшләргә, ата-әсәләрҙең үҙҙәренең яуаплылыҡ тойоуына өлгәшергә һәм киләсәккә маҡсаттар ҡуйырға мөмкин булыр тип өмөтләнәбеҙ.



*Яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса дәүләт телдәре мотлаҡ уҡытыла торған бүлеккә индерелде. Был яңы стандарттар, бер яҡтан, дәүләт теленең позицияһын нығытһа ла, Мәғариф министрлығы дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙы ҡыҙыҡлыраҡ итеү, методикаларҙы, ҡулланмаларҙы, әсбаптарҙы яңыртыу буйынса эш алып барырға тейеш. Был бик һәйбәт мөмкинлек, сөнки ул дәүләт телен бер ҡыйынлыҡһыҙ уҡытыуға индереү мөмкинлеген бирә. Был башҡорт телен дәүләт теле булараҡ һаҡлап алып ҡалыуға һәм артабан үҫешенә алып килер тип ышанабыҙ.*

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әңгәмәселәрем билдәләүенсә, Республика башҡорт ата-әсәләре комиссияһы ойошторолғандан алып уҙған ошо йылдарҙа асыҡланған иң ҙур мәсьәлә - башҡорт ата-әсәләренә башҡорт төркөмдәре һәм кластары асырға ыңғай яуап бирелмәүенең төп сәбәбенең балаларҙың һанына һәм финанс ресурстарына бәйле булыуы. "Аҡса иҫәпләүсе"ләр билдәләүенсә, төркөмдәрҙә, кластарҙа балалар һаны 25-тән дә кәм булырға тейеш түгел. "Башҡорт телен үҫтереүҙә финанс тәьминәт етди тотҡарлыҡ булып тора. Әлбиттә, был дөрөҫ түгел, сөнки телде һаҡлауға, телде үҫтереүгә бик ҙур кире йоғонто яһай. Алла бойорһа, ошо һорауҙы күтәрергә уйлайбыҙ, сөнки телде өйрәнеүгә оптимизация, финанс мәсьәләләре аяҡ салырға тейеш түгел", - ти әлеге комиссияны етәкләүселәр.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аҡса һәм мөхәббәт етешмәгән көндәлек мәшәҡәттән ҡотолоғоҙ

Ҡанбаба-друид Конедда тарафынан әйтелгән был һүҙҙәр. Друидтар - кельттарҙың, бретонецтарҙың, шотландтарҙың тау халҡын, ирландтарҙы, валлийҙарҙы, корнуолдарҙы үҙенә берләштергән халыҡ төркөмөнөң ҡанбабалары була. Улар көс һәм тәбиғәт уңдырышлылығын символлаштырған имәнгә табына. Улар үткәндәрҙең һөҙөмтәле һәйкәлдәренең береһе булған Стоунхенджды төҙөүгә өлөш индерә. Англияның көньяғында Солсберий тигеҙлегендә урынлашҡан был һәйкәл, сығып килгән ҡояшҡа һәйкәл була, ҡояш тотолоу һәм башҡа астрологик күҙәтеүҙәрҙе әйтеүсе ҡорал булып тора.

Кельттар башҡа таш түңәрәктәр, бағаналар, мегалитик ҡоролмалар, шул иҫәптән дольмендар ҡора. Улар үҙҙәрендә бик күп булған байлыҡты, бигерәк тә аҡыл байлығын, һаҡлау өсөн тәғәйенләнә.

Беҙҙең буталған заманда ата-олатайҙарҙың ижадына хас булған бер сифат бөтөнләй юғалған. Һүҙ байлыҡ хаҡында бара. Күптән түгел быуаттар дауамында ер аҫтында ҡалған ҡала табыла. Унда был сифат уйламағанса килеп сыға. Ҡалаларҙың береһе Иорданияла урынлашҡан; бөгөн ул тар тарлауыҡтарҙың таштары аҫтында ҡалған, әммә ул замандағы Европаның үҫешкән мәҙәниәтенә хас булған архитектура стиле образын һаҡлаған. Ул үҙенең ҡаяға соҡоп яһалған, әммә ваҡыт һынауына бирешмәгән һүрәттәр менән биҙәлгән ҙур залдары һәм бүлмәләре менән һоҡландыра.

Икенсе боронғо ҡала Перуҙың ҡуйы урмандарында, Кусконан илле миль самаһы төньяҡ-көнбайышҡа табан табылған. Ул Андтың лианалары, ағастары аҫтына күмелгән булған. Был ҡала Мачу-Пикчу тип аталған һәм ваҡытында бөйөк баш ҡала һәм ныҡлы ҡәлғә булып торған. Бөгөн бындай цитаделдә төҙөү өсөн цивилизациялы донъяның барлыҡ байлыҡтары китер ине.

Был ҡалаларҙың береһе лә друидтар тарафынан төҙөлмәгән, әммә улар беҙгә мираҫ итеп ҡалдырған байлыҡ беҙҙән йәшеренеп ятырға мөмкин икәнлеккә бер миҫал.

Друидтар имәнгә уның көсө һәм сәтләүектәре күп булыуы өсөн генә түгел, ә ул тормош мәғәнәһен аңлатҡан өсөн табынған. Тормош - сикһеҙ сынйыр. Әгәр имәнде ҡырҡһаң, ул сәтләүектәренән үҫеп сыҡҡан бихисап имәндә йәшәйәсәк. Имән ағасы бер ваҡытта ла тыумаған, шуға күрә, бер ҡасан да үлмәйәсәк. Быны Кешелеккә ҡарата ла әйтергә була. Тормош - сикһеҙ тәжрибә сынйыры, уның башы ла, аҙағы ла юҡ. Тимәк, уға тәбиғи сикләүҙәр юҡ.

Әммә тәбиғи булмаған сикләүҙәр бар. Улар сикһеҙ Ғаләм аңы өсөн тәбиғи түгел, әммә кеше аңы өсөн тәбиғи. Беҙ тәбиғи булмаған сикләүҙәрҙән ғазапланабыҙ. Улар беҙҙең уйҙарыбыҙ менән тыуҙырылған. Әгәр беҙ нимәнелер сикле итеп күрһәк, ул беҙҙең тормошобоҙҙа ла сикле буласаҡ.

Бер кем дә, тормошта беҙ мөхәббәттә һәм аҡсала сикле, тиеүем менән бәхәсләшмәҫ. Әммә был улай түгел. Кеше әйә була алған аҡса средстволары бер нисек тә сикләнмәгән. Әммә Гэйтс, Форбс, Перо йәки Рокфеллер фамилияһын йөрөтмәгән өсөн генә түгел, кешеләр сикле килем һәм байлыҡ донъяһында йәшәйбеҙ, тип уйлаған өсөн.

Кеше ҡабул итеп алырлыҡ һөйөү ҙә сикләнмәгән. Әммә көҙгөгә ҡарап һәм унда Мэрилин Монроны, Грета Гарбоны, Грегори Пекты, Гэри Куперҙы күрмәгәс, кешеләр сикле ылыҡтырыу донъяһында, тимәк, сикле һөйөү донъяһында йәшәйбеҙ, тип уйлай.

Аҡса йәки һөйөү етмәүҙән ғазапланыу бер нәмәгә лә нигеҙләнмәгән. Ул бары тик һеҙҙең уйығыҙ тарафынан тыуҙырылған. Уйҙарығыҙҙы үҙгәртегеҙ - тормошоғоҙ ҙа үҙгәрәсәк. Быға друидтарҙың серен ҡулланып та өлгәшергә була.

**Роберт СТОУН.**



### 9 АВГУСТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
14.20, 15.15 Давай поженимся! [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Гадалка". Новые серии. [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Д/ф "Вениамин Смехов. Атос влюбленными глазами". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Вместе навсегда". [12+]
0.50 Т/с "Преступление". [16+]
2.35 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
4.10 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**15.45 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Уфа -Токио. Олимпиада-2020.**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Ҡурай даны". [6+]**
**21.00 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**22.00 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любовь". [16+]**
**3.15 Спектакль "Неотосланные письма". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

### 10 АВГУСТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.55, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Гадалка". Новые серии. [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Д/ф "Юлий Гусман. Человек-оркестр". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Вместе навсегда". [12+]
0.50 Т/с "Преступление". [16+]
2.35 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
4.10 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.55 Хоккей. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Автомобилист" (Екатеринбург). Кубок РБ.**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Босиком по городу". [16+]**
**3.15 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

### 11 АВГУСТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.55, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Гадалка". Новые серии. [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Д/ф "Предсказание". К 25-летию со дня смерти Ванги. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Вместе навсегда". [12+]
0.50 Т/с "Преступление". [16+]
2.35 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
4.10 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.15, 5.00 Автограф. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды. [12+]**
**18.55 Хоккей. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Локомотив" (Ярославль). Кубок РБ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любовь - это все, что тебе нужно". [16+]**
**3.15 Спектакль "Незваный гость". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

### 12 АВГУСТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 2.35, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Гадалка". Новые серии. [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Д/ф "Крым. Небо Родины". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Вместе навсегда". [12+]
0.50 Т/с "Преступление". [16+]
2.35 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
4.10 Т/с "Женщины на грани". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**15.45 Ҡош юлы. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Ҡурай даны". [6+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мне по кайфу". [16+]**
**3.15 Спектакль "Земляки". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

### 13 АВГУСТА
### ПЗТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.25 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. Музыкальный фестиваль "Жара" в Москве. Хиты 2000-х. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф "Юл Бриннер, великолепный". [12+]
1.25 Д/ф "Полет нормальный!" [12+]
5.20 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Вместе навсегда". [12+]
1.50 Т/с "Преступление". [16+]
3.30 Х/ф "Солнцекруг". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 "Декоративный огород". [12+]**
**10.30 Песни на стихи поэта-песенника, заслуженного работника культуры РБ Радика Хакимьянова. [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [6+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00 Чемпионат мира по спортивной борьбе среди юниоров.**
**16.15 "Иволга-2019". [6+]**
**16.30 Церемония открытия Чемпионата мира по спортивной борьбе среди юниоров.**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.55 Хоккей. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Северсталь" (Череповец). Кубок РБ.**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Х/ф "Три метра над уровнем неба". [16+]**
**2.30 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**4.30 "Весело живем!" [12+]**
**4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

### 14 АВГУСТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.10 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.35 Д/ф "Крым. Небо Родины". [12+]
15.25 Д/ф "Полет нормальный!" [12+]
16.35 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Д/ф "Предсказание". К 25-летию со дня смерти Ванги. [12+]
19.00, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Х/ф "Бледный конь". [16+]
1.15 Д/ф "Индийские йоги среди нас". [12+]
2.15 Модный приговор. [6+]
3.05 Давай поженимся! [16+]
3.45 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Смотреть до конца. [12+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Цыганское счастье". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Музыка моей души". [12+]
0.40 Х/ф "Два Ивана". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 16.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Байтус". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсык". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башҡорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00, 5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**17.00 Чемпионат мира по спортивной борьбе среди юниоров. Предварительные встречи и финалы по грэпплингу.**
**19.00 Чемпионат мира по спортивной борьбе среди юниоров. Церемония награждения.**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш.яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Чайка". [12+]**
**1.45 Новости недели (на баш.яз)./. [0+]**
**2.30 Спектакль "Любовница". [12+]**
**4.45 Замандаш. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

### 15 АВГУСТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.25 Х/ф "Небесный тихоход". Кино в цвете. [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Небесный тихоход". [0+]
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Предсказание". К 25-летию со дня смерти Ванги. [12+]
15.00 "Наедине со всеми". К 90-летию Микаэла Таривердиева. [16+]
15.55 Д/ф "Игра с судьбой". К 90-летию Микаэла Таривердиева. [12+]
16.50 Вечер музыки Микаэла Таривердиева. [12+]
18.15 Премьера. Премия "Шансон года". [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.45 Х/ф "Анна и король". [0+]
2.20 Модный приговор. [6+]
3.10 Давай поженимся! [16+]
3.50 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.15, 3.10 Х/ф "Хороший день". [12+]
6.00 Х/ф "Сюрприз для любимого". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.45 Т/с "Цыганское счастье". [12+]
18.00 Х/ф "Личные счеты". [16+]
20.00 Вести.
22.30 Д/ф "ГКЧП. 30 лет спустя". [16+]
23.30 Х/ф "Буду жить". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Ал да гөл". [6+]**
**10.30 "В гостях у Акбузата". Репортаж с Республиканского фестиваля детского и юношеского творчества. [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.). [0+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Посмотрим... [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Хазина". [12+]**
**17.30 "Мои сыновья - мои крылья". Вечер памяти Амира Абдразакова. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.). [0+]**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Х/ф "Опасные секреты". [16+]**
**1.30 Спектакль "Мона". [12+]**
**4.15 Х/ф "Улыбка Бога, или Чисто одесская история". [12+]**

✓ *Август аҙағы, сентябрь башында ҡомалаҡ тубырсыҡтарын йыя башлайҙар. Бында ла үҙ нескәлектәре бар. Маҡсатҡа ярашлы йә үтә ныҡ өлгөрөп ҡарайынҡырағандарын алаһың, йә сағыу йәшел, өлгөрмәгәндәрен.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҒАИЛӘНӘН ДӘ ЯҠШЫРАҠ ОЖМАХ ЮҠ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**30-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Старт. Боланут. Мәтрүшкә. Йомшаҡ. Тәңре. Әнис. Аласыҡ. Унан. Евпатория. Улъя. Урта. Айыу. Мәрүәр. Әсҡәт. Ҡауҙы. Ағым. Уҫаҡ. Шүмән. Әбәк. Әрем.

**Вертикаль буйынса:** Тилермән. Меңъяпраҡ. Егет. Ата. Баяр. Ғәйрәт. Үгәй. Тәлгәш. Уҡмаш. Уяу. Үпкә. Әпсен. Урам. Тауыҡ. Әҫпе. Йылантамыр. Утрау. Шанс. Ҡырҡъяпраҡ.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ҠОМАЛАҠ



**Халыҡ дауаһында ҡомалаҡтың сәскәһе иң кәрәклеһе. Борон тибет медицинаһында ҡомалаҡ сәскәһе шешкә ҡаршы ышаныслы дауа булараҡ ҡулланылған. Ҡомалаҡ ярҙамында дауаланған осраҡта яман шеш менән яңынан ауырымайһың, тип иҫәпләнгән.**

Ҡомалаҡтың сәскә атыуын ҡарауыллап ҡына торорға кәрәк. Йәйҙең уртаһы үтеп тә бара, ә тәлгәштәрҙәге сәскәләр һаман да ваҡ ҡына бөртөксәләр кеүек тығыҙ, атмай һуңлап киткәндәр һәм көндәр ҙә һалҡын ямғырлы тора. Әммә икенсе көнөнә ҡапыл ғына ул сәскә атып ебәрә, йәшкелт-һары өрфөйә тәлгәштәр эленеп тора һәм июлдең эҫе көндәре килерен вәғәҙәләй. Был ваҡытта ауыҙ асып торорға түгел. Үҙең менән ике кәрзин алып, ҡомалаҡ йыйырға сығырға кәрәк. Ауыҙы ябыҡ һауытҡа, бигерәк тә полиэтилен муҡсаға йыйырға һис ярамай - сәскәләр тиҙ арала эҫенеп, яналар. Сәскә атҡан ҡомалаҡ еҫен еҫкәп, баш әйләнергә мөмкин. Аҙағыраҡ был сәскәләрҙе киптереп алаһың һәм тәүҙә күп һымаҡ тойолған йыйылма әҙәйеп ҡала. Сәскәләрҙең бер өлөшө араҡы менән эшләнгән төнәтмәгә китә. Уны 20-шәр тамсылап ҡомалаҡ тамыры ҡайнатылған һыуға ҡушалар - шулай уҡ шешкә ҡаршы дауа.

Ә бына август аҙағы, сентябрь башында ҡомалаҡ тубырсыҡтарын йыя башлайҙар. Бында ла үҙ нескәлектәре бар. Маҡсатҡа ярашлы йә үтә ныҡ өлгөрөп ҡарайынҡырағандарын алаһың, йә сағыу йәшел, өлгөрмәгәндәрен. Тубырсыҡтарҙың ҡуш емештәре, әлбиттә, халыҡ медицинаһында киң ҡулланылыш тапҡан. Улар электән нервылар талсығыуҙан, невроз, йоҡоһоҙлоҡ, гастрит, цистит, бәүел юлының ауырыуы, бөйөр лаҡандары ауырыуы, бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙарын дауалағанда һәм йөрәк-ҡан тамырҙарын яҡшыртыусы сара булараҡ (бигерәк тә миокард насар булғанда) ҡулланыла. Шулай уҡ баш ауырығанда, баш әйләнгәндә, үпкә туберкулезы, матдәләр алышыныуы боҙолғанда, эсәктәр эшмәкәрлеге боҙолғанда, грипп менән сирләгәндә, фалиждан дөйөм нығыныу өсөн ванна, подагра, ревматизм, нефрит ауырыуҙарын дауалағанда файҙалы. Үләндең төнәтмәһен һыуыҡ тейгәндә, күҙҙәр күреүен яҡшыртыу өсөн дә файҙаланалар. Тубырсыҡтарҙан эшләнгән онтаҡтан яһалған мазь (суҫҡаның эс майына 1:4 нисбәтендә) насар уңалған яраларҙан, имгәнгәндә ауыртыуҙы баҫыу өсөн, ревматизмдан һыҙланғанда, невралгия булғанда, псориаз, сиҡандарҙы дауалауҙа ҡулланыла. Йоҡоһоҙлоҡтан йонсоғанда яҫтыҡҡа ҡомалаҡ тубырсығы тултыралар.

Ҡомалаҡтың бындай күп төрлө ауырыуҙарҙан дауа булыуы аптыратмаһын. Уның химик составы бар һорауҙарға яуап бирә ала. Мәҫәлән, ҡомалаҡ тубырсыҡтарының составында йөҙҙән ашыу төрлө әсе матдәләр табылған, улар араһында иң әһәмиәтлеһе - лупулин. Ҡомалаҡ тубырсыҡтарының гормональ әүҙемлеге асыҡланған.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1442 - 1443 һижри йыл.

| Август (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (30) дүшәмбе | 4:12 | 5:42 | 13:30 | 19:29 | 20:59 | 22:29 |
| 10 (1) шишәмбе | 4:14 | 5:44 | 13:30 | 19:27 | 20:57 | 22:27 |
| 11 (2) шаршамбы | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:25 | 20:55 | 22:25 |
| 12 (3) кесе йома | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 19:23 | 20:53 | 22:23 |
| 13 (4) йома | 4:19 | 5:49 | 13:30 | 19:21 | 20:51 | 22:21 |
| 14 (5) шәмбе | 4:21 | 5:51 | 13:30 | 19:18 | 20:48 | 22:18 |
| 15 (6) йәкшәмбе | 4:23 | 5:53 | 13:30 | 19:16 | 20:46 | 22:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# НИСЕК ДАУАЛАНЫРҒА?

**Веналарҙың варикозлы киңәйеүе.** Ҡомалаҡты 2 ҡалаҡ тубырсыҡ-ҡуш емешенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, быуҙа тотоп 15 минут ҡайнатырға. Шунан 30-40 минут төнәтергә. Ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Астения (организмдың дөйөм хәлһеҙлеге), климакс, цистит, юғары енси ярһыусанлыҡ.** 2 балғалаҡ үләнгә (өлгөргән тубырсыҡтар яҡшыраҡ) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, йылыла 30-40 минут тоторға. Ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

**Аллергия.** 1 ҡалаҡ тубырсыҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнап торған һыу быуына 15 минутҡа ҡуйырға. Һыуытырға һәм һөҙөргә. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 1/4 стакан эсергә. Бер үк ваҡытта ошо рәүешле әҙерләнгән төнәтмә менән тәндәге әҫпе урындарын сайырға. Ашҡаҙан, үпкә, бауыр яман шешенән файҙалы. 1 ҡалаҡ өлгөрмәгән тубырсыҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта өстән бер өлөшөн бешекләргә. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Бауыр яман шеше һәм башҡалар.** 1 ҡалаҡ ҡомалаҡ сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, теүәл 1 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 50-60-ар мл эсергә.

Бер айҙан сәскәләр ял итә, уның урынына ҡомалаҡ тамыры төнәтмәһен эсергә: 1 балғалаҡ ваҡланған тамырға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 5 минут ҡайнатырға йәки 30 минут ҡайнар һыу быуында тоторға, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Сирек стакан төнәтмәгә 20 тамсы ҡомалаҡ сәскәһе төнәтмәһен тамыҙып, көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БАШҠОРТ ҠАЙЫУЫ

**Ҡайыу (сигеү) - халыҡ сәнғәтенең киң таралған төрҙәренең береһе. Халыҡтың ҡайылған әйберҙәренең биҙәктәр системаһы тамырҙары бик тәрәнгә, боронғоға барып тоташа. Унда кешеләр тирә-яҡ мөхитте йәнләндергән, кейемендә һәм көнкүреш әйберҙәрендә ҡояш, тормош ағасы, ҡоштар һәм башҡаларҙы һүрәтләгән, улар йортҡа именлек килтерә тип иҫәпләгән осорҙарҙың эҙе һаҡланған.**

Тарихи үҫеш барышында һәр халыҡтың сигелгән биҙәге айырым үҙенсәлеккә, уны эшләү ысулдары, төҫтәре ҡабатланмаҫ булып формалашҡан. Ҡайыу алимдары, биҙәктәр һәм уларҙың төҫтәре быуындан-быуынға камиллаша барған. Башҡа күп халыҡтарҙың гүзәл заттары кеүек, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла ҡайыу оҫталығын яҡшы белергә тейеш булған. Ҡыҙҙар үҙҙәренең бирнәһен сигеп биҙәгән, биҙәктәрҙең күплеге һәм төҫтәр сағыулығы кейемдең тәғәйенләнеше һәм ҡатындың йәшенә ҡарап билдәләнгән. Башҡорт ҡайыуына төрлө йөйҙәр хас. XIX быуат уртаһына тиклем ҡулдан һуғылған туҡыма ҡайыу өсөн төп материал булып торған, ә XIX быуаттың икенсе яртыһынан һатып алынған кизе-мамыҡ һәм ебәк туҡымалар ҡулланғандар. Энә йәки ырғаҡ ярҙамында, кирге ҡулланып йә унһыҙ сиккәндәр. Башҡорттарҙың ҡайыу алимдары бик күп төрлө булыуы нағыштарҙың, төҫтәрҙең дә төрләнгән билдәләй, ҡайылы әйберҙәр һаны ла бихисап. Сигеү бөгөн дә уларҙа киң таралған художестволы ижад төрө булып ҡала. Иғтибарығыҙға башҡорттарҙың был оҫталығына арналған БР Милли музейында һаҡланған өлгөләрҙән торған карточкалар йыйылмаһын тәҡдим итәбеҙ. Йыйылманы Р.А. Хафизова, А.Р. Хәснуллин төҙөгән, яуаплы мөхәррире тарих фәндәре докторы, РФ һәм БР атҡаҙанған фән эшмәкәре Р.З. Янғужин.



Тамбурлап һәм күпертеп сигелгән таҫтамал башы



Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ҡайһы бер элементтар тамбур сылбыры менән тотош ҡаплап сигелгән. Ерлеккә ҡапма-ҡаршы төҫтәге контур биҙәк сигеүҙе баҙыҡландыра. Сигеүле алъяпҡыстың бер өлөшө



Урын тартҡыларҙа ҡуш элмә сигеү



Контурлы элмә менән сигелгән ҡашаға ҡормаһы



Ҡайталап сырмау ысулы менән сигелгән кейәү ҡулъяулығы



Киндер туҡыма ептәренең һаны буйынса ебәк еп менән нағышлап, биҙәкләп, ҡайталап сырмап сигеү. Өйкөм биҙәк һалынған таҫтар баштары



Ҡайталап сырмау ысулы менән сигелгән таҫтар башы. Баҙыян биҙәк



Үсемлек биҙәкле ашъяулыҡта ябай элмә сылбыры (һабаҡтар) ҡуш элмә менән аралаша (япраҡ һәм сәскәләр)



Хисаплап ҡайыу һәм биҙәкләү ысулы менән ебәк ептән сигелгән өйкөм биҙәк. Таҫтар башы



Ҡыя сәнсем, биҙәү һәм ваҡ сатраш ысулдарын аралаштырып сигелгән һарауыстар



Нағышлап сигелгән "бесәй табаны" биҙәге



Алъяпҡыс итәктәренең фрагменттары. Үрмә гөл кеүек сәскә һәм япраҡтар тотош тамбурлап сигелгән. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондары

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӨҘ ҠАТ ӘЙТКӘНСЕ...

## бер ҡат эшләп күрһәт

Ауыл тулы туғаның булғансы, ауыл һайын берәр булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡта дуҫтар артмай, был ваҡыттағы юғалтыуҙарҙы кире ҡайтарып булмай.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Бурысыңды атҡарыуҙан да юғарыраҡ бөйөклөк тә, шатлыҡ та юҡ.

**(Эрнст Ренен).**

Ҡайһы берәүҙәр асылы менән түгел, атамаһы менән генә кеше тип нарыҡлана.

**(Цицерон).**

Дуҫлыҡ "тейешһең" тип талап итмәй, мөмкин булғаны менән ҡәнәғәтләнә.

**(Аристотель).**

Тормошто тормоштоң үҙенән түгел, китаптарҙан һәм сәнғәт әҫәрҙәренән нығыраҡ тоябыҙ.

**(Теодор Драйзер).**

Әйтелгән һүҙ өсөн үкенергә тура килде, әйтелмәгәне өсөн - юҡ.

**(Ксенократ).**

Рухи аҙыҡ менән йәшәгәндәр яҙмышҡа буйһоноп бармай.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарттың өлкән улы өйләнеп, башҡа сығып йәшәй башлайҙар. Бер саҡ улы ата-әсәһенең хәлен белергә килә. Атаһы менән әсәһенең йәшәйеше шул тиклем күңелһеҙ тойола йәш кешегә һәм ул байтаҡ ваҡыт уларға йәлләп ҡарап ултыра. Ул үҙенең кәләше менән яратышып туя алмауын, һәр саҡ бер-береһенең ҡулдарынан ғына тотошоп, етәкләшеп йөрөүҙәрен, бер-береһенә әленән-әле мөхәббәт һүҙҙәре еткереүҙәрен иҫенә төшөрә. Шунан атаһына былай ти:**

**- Атай, ни өсөн һеҙ әсәйем менән бер-берегеҙгә һөйөү һүҙҙәре һөйләмәйһегеҙ? Шул тиклем күңелһеҙ йәшәйһегеҙ. Мин һеҙҙең дә беҙҙең кеүек бер-берегеҙҙе яратыуығыҙҙы, бәхетле булыуығыҙҙы теләйем...**

**- Әй, улым, - ти атай кеше, - һинең мөхәббәтең бала йәшендә генә бит әле, ул йылдан-йыл үҫер, өлкәнәйер, яңы һүҙҙәр өйрәнер, яңы мөнәсәбәттәргә яраҡлашыр. Мәҫәлән, мин әсәйеңдең күршеләр менән сираттағы тапҡыр талашып ҡайтып, уларға зарлана башлауын тыңлайым да, "Мин һине ҡалай яратам", тип уны бүлдерә һалам. Миңә балыҡ тота торған ауымды үрергә ярҙам иткәндә: "Әй, ҡартыҡайым, яратам да инде үҙеңде", - тигән һүҙҙәрҙе әсәйең дә әйтә. Ау үрергә яратмағанын беләһең бит һин уның..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21032

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башҡортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
6 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 881